ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 декабрь (аҡъюлай) 2018

№48 (830)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үҙ йүнебеҙҙе...**

үҙебеҙ күрәйек



3

**Киләсәктә был ергә**

Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...



8-9

**Тағы түләргә!**

Был юлы сүп-сар өсөн



12

**Бер ауылдың һүнеп барғаны**



13

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 3 декабрҙән 13 декабргә тиклем 2019 йылдың тәүге ярты йыллығына гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзанырак ҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителде. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ДО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 532 һум 14 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I - II төркөм инвалидтары - 478 һум 56 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылайыҡ, тип саҡырабыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ауыл кешеһенең бөгөнгө мәшәҡәттәре ниндәй?

***Баязит СОЛТАНҒУЖИН, Йылайыр районы, Һабыр ауылы:*** Бына ҡар күрәйбеҙ инде хәҙер, Алла бирһә, оҙаҡ көттөрөп, ҡар яуҙы бит, ниһайәт! Еребеҙгә ысынлап ҡыш килгәс, күңеллерәк тә булып китте әле, юғиһә, ноябрҙә ҡара саң туҙрап ятты бит. Һәр нәмәнең үҙ мәле булырға тейештер инде. Туҡай әйтмешләй, "ел дә ваҡытында иҫеп, ямғыр ҙа ваҡытында яуған" замандар ише. Беҙҙең Һабыр ҙур ғына ауыл: 11 йыллыҡ мәктәбебеҙ, мәҙәниәт йортобоҙ, медпункт, мәсетебеҙ бар. Ауыл кешеләре, йәшенә ҡарап, һәр кемеһе үҙ эше менән мәшғүл: донъя көтә, ғаиләһе хаҡында хәстәрлек күрә. Кеше мал аҫрай, шунын көсө менән тереклек итә. Әлеге мәлдә шәхси хужалыҡтарҙың күбеһе һуғымға инселәгән малын ашата, башҡаларын да хәстәрләй. Ҡышҡылыҡҡа ҡырҙан бесәнен алдыра. Ағыулыҡ ағына килгәндә, беҙҙә бит хатта газ да бар хәҙер. Кем уны өйөнә үткәргән - йәнгә рәхәт - утын хәстәрләү кеүек күп көс талап иткән эш елкәнән төштө. Хаҡлы ялда булһам да, урман хужалығында эшләп йөрөйөм: кемдер урман киҫә, ә беҙ ағас ултыртабыҙ, питомникта ҡарағай үҫентеләре тәрбиәләп үҫтерәбеҙ. Эшләмәй ҙә булмай: иң кесе ҡыҙыбыҙ Мәскәүҙә Бауман исемендәге университетта уҡый, стипендияға ғына йәшәп булмай бит инде, ярҙам итеп тороу - беҙҙең бурыс. Унан өлкәнерәк тағы өс ҡыҙыбыҙ кейәүҙәләр, шулай ҙа уларға ла иғтибар, ярҙам кәрәк. Һуғым һуйғас, экологик таҙа ауыл ризығынан уларға ла өлөш сығарабыҙ. Ҡала ерендә бит хәҙер ниндәй ризыҡ һатып алһаң да ни тәме, ни йүне юҡ. Исмаһам, ауыл итенән, майыҡоротонан ауыҙ итһен балалар, тип тырышабыҙ. Даян улыбыҙ Аҡъяр район дауаханаһында табип-онколог булып эшләй, йәмәғәт эштәре лә алып бара: БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары, район Советы депутаты. Хәстәрлекле ғаилә башлығы ла ул, бәләкәйҙән тырыш, үҙаллы булып үҫте, беҙгә мәшәҡәт һалманы. Көндәлек хәстәрлектәр менән йәшәп ятабыҙ әле шулай. Балалар үҫеп етә лә таралыша, ә беҙ - ата-әсәләрҙең бурысы - нигеҙҙе һыуытмай, усаҡты һүндермәй, тәү ҡарашҡа әлеге "көндәлек хәстәрлектәр" менән, ләкин изгеләрҙән-изге бурысыбыҙҙы үтәп, ауылыбыҙ ҡотон һаҡлап, унын киләсәгенә өмөт итеп йәшәйбеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## КӨЙЛӘР КӨЙ БУЛҺЫН

**Бөтәбеҙгә лә таныш күренеш: сирләп китеп, поликлиникаға барһаң, табиптың һинә ҡарарға ваҡыты ла юҡ: башын эйеп ала ла, яҙа ла яҙа. "Яҙыусы" һөнәрҙәр иҫәбенә хәҙер уҡытыусылар ҙа әүҙем ҡушылды. Яңыраҡ ҡына таныш бер уҡытыусы: "Балалар уҡытырға ваҡыт та ҡалмай: көнө-төнө белешмә, план, отчет яҙабыҙ", - тип зарланып торғайны. Былтырғы уҡыу йылында ғына ла ул 11 төрлө йүнәлеш буйынса план һәм программа төҙөгән, белешмә тултырған булып сыҡты...**

Эйе, ҡағыҙ абруйы көслө беҙҙә, йыш ҡына кешегә ҡарағанда ҡағыҙға нығыраҡ ышаналар, айырыуса төрлө кимәлдәге власть органдарында, сөнки чиновниктар үҙҙәре лә халыҡтың тормош хәлдәрен ҡағыҙҙа матур итеп күрһәтергә бик оҫтарҙы бит. Ҡағыҙҙа матур һандар бар, ә тормошта улар юҡ, һәр хәлдә, һиҙелмәй. Күпме дауам итер ине икән ҡағыҙҙағы "ыңғай динамика"? Һәр ваҡыттағыса, ситуацияны ил Президенты Владимир Путин үҙ ҡулдарына алды: ил яҙмышын хәл итеү бурысы йөкмәтелгән Дәүләт советы президиумы ағзаларын, йәғни төбәктәр етәкселәрен, хөкүмәт ағзаларын, сенаторҙарҙы, ил башлығы ярҙамсыларын Ялтаға ике көнлөк ултырышҡа йыйҙы һәм шулай тип хәбәр һалды: "Беҙгә матур һәм шыма яҙылған һөйләмдәрҙең ҡағыҙҙағыһы кәрәкмәй, ә уларҙың тормошобоҙҙан урын алыуы, ыңғай үҙгәрештәрҙең һәр кешегә барып етеүе кәрәк! Үҙгәрештәр халыҡтың тормош кимәлендә, эш хаҡтары, пенсиялар кимәлендә күренһен һәм улар уртаса күрһәткестәр түгел, ә ҡулға төшкән ысын аҡса булһын!" Ҡыҫҡаһы, Президент Хөкүмәттән һәм төбәк етәкселәренән май указдарында билдәләнгән йүнәлештәрҙең, милли проекттарҙың үтәлеше буйынса аныҡ һөҙөмтәләр талап итте. "Эш указда ла, хатта әлеге милли проекттарҙа ла түгел, ә ошо эштә аныҡ һөҙөмтәләргә өлгәшеүҙә, - тине дәүләт башлығы, - кешеләргә аныҡ һөҙөмтәләр кәрәк".

Эйе, олпат чиновниктар аңына барып етһен, улар бер аҙ ҡыбырлаһын өсөн ҡат-ҡат әйтелде был һүҙҙәр Президент тарафынан. Хатта был асыҡтан-асыҡ һөйләшеү өсөн "формаль булмаған" мөхит тыуҙырылды: Дәүләт советы президиумы ағзалары ултырышҡа рәсми булмаганса галстукһыҙ ғына килделәр. Иң ҡыҙығы шул булды: улар элеккесә оҙон өҫтәл артына теҙелеп түгел, ә темалары буйынса төркөмләшеп, ете түңәрәк өҫтәл артына ултырыштылар. Шуныһы ғына бер аҙ эсте бошора: Крыловтың "Квартет" басняһындағыса ғына килеп сыҡмаһын инде, Раббым... Нисек ултырһалар ҙа ултырһындар, тик матур бер көй сығарһындар инде, ниһайәт! Тормошобоҙҙо көйләй торған көй...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

12+

✓ *Күңелемде әрнеткәне ауылдағы егеттәрҙең араҡы ҡоло булып йөрөүҙәре булһа, уларға спиртлы эсемлек һатыусылар тағы ла нығыраҡ йәнемдә үртәй. Ошондай "эшҡыуар"ҙарҙың эшмәкәрлеген туҡтатыр әмәл табырға кәрәк.*



ӘЙТЕРҺҮҘЕМ БАР!

# ӨМӨТ УЯНДЫ

**Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров халыҡ мәнфәғәтен тәүге урынға ҡуйыуы, һәр мәсьәләгә айырым туҡталыуы, уны хәл итергә тырышыуы күңелгә май булып яғылды. Бал ҡорто күсе кеүек гөжләйбеҙ һуңғы ваҡытта. Умарта ауыҙына килеп таяҡ тығып ебәрҙеләрме ни, бөтә халыҡ бер ыңғайға ҡуҙғалып китте. Кешелә киләсәккә ниндәйҙер өмөт уянды, ышаныс барлыҡҡа килде. Әлегә тиклем үҙҙәрен ҡул еткеһеҙ бейектә итеп хис иткәндәр ҙә ергә төшөп, ҡәҙимге бер бәндәгә "әүерелә" башланы. Ҡыуандыра был хәл.**

Ә Башҡортостанда күҙгә элер проблемалар етерлек. Тәү сиратта, минеңсә, тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау йәһәтенән башҡараһы эштәр бик күп. Машиналап сығарылған ағастар урынына яңылары ултыртылмай. Ҙур йөк машиналары урмандағы ғына түгел, ә уға яҡын тирәләге ауылдарҙың да юлын боҙа, ләкин "Әйҙә, төҙөкләндереүгә ярҙам күрһәтәйек", тигәндәре юҡ. Халыҡ үҙенә тейешле ағасты бишәр йыл көтә. Өҫтөбөҙгә урман ишелеп төшөргә тора, ә йәштәр йорт төҙөргә ағас көтөп ала алмай. Ул йортто ҡуйырға ер эләктереү ҙә үҙе бер оҫталыҡ талап итә хәҙер. Мәҫәлән, беҙҙең Әбйәлил районында әлегә тиклем сит райондан килеүселәргә ер алыу анһат булды, ә урындағы халыҡ уларҙан һатып алды. Ҡайҙа бында ғәҙеллек? Шул уҡ күп балалы ғаиләләргә лә ерҙе уты-һыуы булмаған, үҙәктән ситтә ятҡан урындарҙа бирәләр. Балалар ни рәүешле балалар баҡсаһына һәм мәктәпкә йөрөргә тейешлеге бер кемде лә борсомай. Ошондай моменттар яңы властың иғтибарынан ситтә ҡалмаһын ине.

Йәштәребеҙ "һыпырылып" ситкә китә. Үҙебеҙҙә эш урындары булһа, ғаиләләренән айырылып йөрөмәҫтәр, ҡатындары - ирле, балалары - атайлы булып үҫер ине. Пенсия йәшен арттырыу йәштәр араһындағы эшһеҙлекте тағы ла көсәйтәсәк, тимәк, әлеге хәлде көйләү шулай уҡ актуаль өлкәнең береһе. Көстәре ташып, үҙ иле өсөн янып-көйгән йәштәрҙе күрергә, күтәрергә, власть органдарында эштәр бирергә кәрәк. Тәне менән бында, ә күңеле, булмышы менән үткән быуатта тороп ҡалған ағайҙар түрә ултырғысына сат йәбешеп ултырмаһын ине. Бөгөнгө көндөң темпы менән бер тигеҙ атлаған, һәр яңылыҡты сос ҡына тотоп алып, уны эштә ҡуллана белгән егет-ҡыҙҙарға юл биргәндә, беҙҙең төбәк артта һөйрәлеүселәрҙән алдынғылар рәтенә сығасаҡ.

Күңелемде әрнеткәне ауылдағы типһә тимер өҙөр егеттәрҙең араҡы ҡоло булып йөрөүҙәре булһа, уларға спиртлы эсемлек һатыусылар тағы ла нығыраҡ йәнемде үртәй. Ошондай "эшҡыуар"ҙарҙың эшмәкәрлеген туҡтатыр әмәл табырға кәрәк. Оят та, намыҫ та тигән төшөнсә ят булған был кешеләрҙе ҡаты ҡыҫымға алырға һәм эшмәкәрлектәрен төбө-тамыры менән юҡ итеү мөһим. Күпселек ауылдарҙа полиция хеҙмәткәрҙәре был хәлде белә тороп та, уларҙы тыймай. Ә ҡайһы осраҡта хатта үҙҙәре лә һата. Был вәхшилекте юҡ итеүҙә ауыл активистары менән бергә власть вәкилдәре лә әүҙемлек күрһәтергә тейеш.

Йәшәгән еребеҙҙең киләсәген бергәләп ҡайғыртайыҡ, бөгөнгөбөҙҙө генә түгел, иртәгәһе көндө лә уйлайыҡ. Түрәләр халыҡҡа асыҡ булһа, эштәр алға китер. Бер-беребеҙҙе ишетәйек, йәмәғәт!

**Илнур МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**
**Әбйәлил районы Асҡар ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ауыл кешеһенең бөгөнгө мәшәҡәттәре ниндәй?

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәрйәм ӘБСӘЛӘМОВА, Баймаҡ районы:*** Ауылыбыҙ район үҙәгенән алыҫта, урман төпкөлөндә ята. Мал-тыуар тәрбиәләү өсөн дан инде бына. Дөрөҫөн әйткәндә, шунан башҡа ауыл халҡының башҡа төрлө шөғөлө лә юҡ, тип әйтерлек. Ауыл хакимиәте, мәктәп, медпункт, балалар баҡсаһында нигеҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар ғына эшләй, ә бына ир-егеттәргә эш юҡ. Дөрөҫ, арендасыға урман ҡырҡыуҙа, таҡта ярыуҙа иҫәпле генә кеше эшләп йөрөй, башҡалар йә пенсионер, йә аҡса эшләргә ситкә сығып китәләр. Хәҙер ауыл ерендә лә, ҡалалағыса, мал аҫрамай ғына көн күргән кешеләр бар, ләкин ундайҙар нигеҙҙә ҡарт-ҡоро, яңғыҙаҡтар. Ә бына йәш һәм урта йәштәге ғаиләләр күпләп мал, ҡош-ҡорт тота. Әлеге ваҡытта ҡаҙы-өйрәге бер нисә тиҫтәгә барып еткән унған ҡатын-ҡыҙ хужабикәләр бер-береһенә ярҙамлашып, ҡаҙ өмәләре үткәрә. Ә кемдәрҙеке, хәленә ҡарап, тиҫтәнән артмай, улар ҡош-ҡортон үҙе генә эш итеп алды инде. Хәҙер ауыл кешеһе өсөн яуаплы ла, күңелле лә мәл - һуғым осоро яҡынлашты. Шуны ғына көткәндәй, шөкөр, ҡары ла, ниһайәт, яуып һалды. Һуғымсылар бысаҡ ҡайрар саҡ. Егәрле ауылдаштар бер нисә баш һыйыр аҫраһас, былтыр тотонолмаған башмаҡтары, ҙурайып, көрөккән быҙауҙары бар. Малды көткәс, уның файҙаһын да күрге килә бит, тик кеше артыҡ малын ҡайҙа итергә белмәй беҙҙә. Һыйыр малынан тыш, хәҙер йылҡы аҫрағандар ҙа байтаҡ һәм шулай уҡ бер генә баш түгел уларҙа. Өйөр-өйөр булып, ҡырҙа тибендә йөрөйҙәр, тик улар өсөн борсолоуҙар күберәктер: мал юғала, айырыуса аттар. Унан һуң, беҙҙең тораҡ, әйтеүемсә, урман яғы - айыу-бүреһе лә бар. Алыҫ икән, тип тормайҙар, мал бурҙары ла килеп сыҡҡылай.

Малын һуйып, алыҫ булһа ла Баймаҡ йә Сибай баҙарына алып барыр ине әҙәм - күпме кәртә ҡуйылды уның юлына! Малын салыу урынына тейәп алып барырға, рөхсәт алырға, ветврачтан ит өсөн рөхсәт алырға, баҙарҙан урын өсөн рөхсәт алырға... Ҡыҫҡаһы, йырып сыҡҡыһыҙ волокита. Етмәһә, транспорт, яғыулыҡ өсөн түлә - сығымдары мал файҙаһынан артып та китәлер, шәй. Бына шуға кеше ҡул һелтәй ҙә ҡуя. Ситтән берәй алыусы килеп сыҡһа, аңынтоңон белмәҫтән, тейәп ебәреү яғын ғына ҡарап торалар: нисек тә ҡотолорға кәрәк бит. Хатта аҡсаһын аҙаҡ вәғәҙәләүҙәргә ышанып, һемәйеүселәр булыуға ла ҡарап тормай халыҡ. Бер нисә йыл рәттән ауылыбыҙға Татарстандан килеп, быҙауҙар тейәп алып китә башланылар. Белмәйҙәр, тиң: экологик таҙа яҡ бит беҙҙә! Ә быҙау ите ниндәйен дә деликатес. Йә һимертергә алалар ҙыр. Быйыл да көтә халыҡ уларҙы. Үҙебеҙҙең республикала шәхси хужалыҡ продукцияһын файҙаланыуҙа ойоштора алмағас, ситтәр кинәнә инде малдарыбыҙға. Баймаҡта бит бәләкәй генә булһа ла ит эшкәртеү предприятиеһы эшләп торған булһа, урындағы шәхси хужалыҡтар менән килешеү нигеҙендә күпме продукция эшләп сығарыр ине ул! Сибай ит комбинаты ла итте яҡын-тирә ауылдарҙан ҡабул итмәй, ситтән ташый икән, сәбәбе ниҙәлер инде...

***Мәликә СӨЛӘЙМӘНОВА, пенсионер:*** Иремдең вафатына 15 йыл да тулып килә инде. Яҡшы кеше, алдынғы механизатор ине, ләкин совхозыбыҙ тарҡалып, юҡҡа сыҡҡас, эшһеҙлектән миктәп, өмөтһөҙлөккә бирелеп, эскегә һабышты, шул арҡала беҙҙе ташлап китеп тә барҙы. Ике баламды ла уҡытып, кеше итергә тырыштым. Ҡыҙым хәҙер Силәбелә тормош ҡорҙо, мәктәптә уҡыта. Улым Өфөлә аграр университет тамамлап, шулай уҡ эшһеҙлеккә дусар булды. Ауыл хужалығы белгестәре кәрәкмәй бит илгә хәҙер. Киленебеҙ шул уҡ вуздың иҡтисад факультетын тамамланы. Ауылда эшҡыуарлыҡ менән булышып ҡаранылар ҙа, кредит ала алмағас, икеһе лә Себергә сығып киттеләр. Ятаҡта йәшәйҙәр, фатир алып, нығынғансы тип, 6-сы класта уҡыған ейәнемде улар менән ебәрмәй алып ҡалдым. Ул балаға бында ла еңел түгел: иртә менән тороп, күрше ауылға мәктәпкә китәләр - барлығы 15 уҡыусы. Үҙебеҙҙә мәктәпте яптылар. Шул бала хәстәрлектәре менән үтә көндәрем, ул булмаһа, нишләр инем, тип уйлап алам йыш ҡына, юғиһә, ауылда һөйләшеп-серләшеп алырға ла кеше ҡалмай килә хәҙер: ҡайһылары ҙур мәктәбе булған күрше ауылға, икенселәре район үҙәгенә күсеп китә торалар. Байтағы минең балалар кеүек Себерҙә эшләйҙәр. Бала ҡарап торғас, аҡһыҙ ҙа булмай: бер генә булһа ла һыйыр аҫрайым. Йәй, көҙ баҡса, бесән эштәре менән үтә. Улым килен менән ялға ҡайтып, ярҙам итеп китәләр. Ҡош-ҡорт тотам, әле бына күрше ауылда йәшәгән ике һеңлем килеп, ҡаҙ йолҡошоп киттеләр. Улым бесәнен дә йүнләне, утын бар - башҡа ни кәрәк! Иҫәнлек бирһен Хоҙай, шул баланы ла Себергә алып китеп бармаһалар, уҡытып, кеше итергә насип булһын ине, тип теләйем, кис етһә, бергәләп, дәрестәрен ҡарайбыҙ. Үҙем ғүмер буйы балалар уҡытып, хаҡлы ялға сыҡтым, шуға ла уҡыусы бала менән эш итеү миңә ят шөғөл түгел - ейәнемә дөрөҫ тәрбиә бирергә тырышам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠЫҘҘАРЫБЫҘ ҠЫРЫҪЛЫҒЫ - милләтебеҙ иммунитеты...

**Мәрйәгә өйләнгән бер халыҡ артисы үҙенең был хәлен шулай аңлата: "Беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары бигерәк ҡырыҫ, эре ҡылана, уларға яҡын килерлек тә түгел. Башҡа милләт ҡыҙҙары иртәнсәк иркәләп-наҙлап, баллы-татлы һүҙҙәр әйтеп, һөйөп уятһа, беҙҙекеләр "Нимә ҡарап ятаһың, тор!" тип ҡысҡыра, төрткөләй башлай. Шуға күрә мәрйәгә өйләндем дә инде..."**

Кемгә нисектер, миңә ҡалһа, ҡыҙҙарыбыҙҙың ана шулай ҡырыҫ булыуы арҡаһында халҡыбыҙ ҡырылмаһа ҡырҡ ата балаһы йәшәгән Евразия мегаполисында һаҡланып килә лә инде. Ҡырыҫлыҡ беҙҙең ҡыҙ-ҡатындарға тәбиғәттең үҙе тарафынан һалынған. Ҡырыҫ булмағанды тиҙ яулайҙар. Ҡыҙ-ҡатын холҡондағы ҡырыҫлыҡ ир-аттың уға ҡарата етди булыуын талап итә, уға шаярып, йә юрый ғына яҡынлап булмай. Шуға күрә мин уларҙағы ҡырыҫлыҡты күркәм холоҡтар рәтенә индерәм. Беҙҙең ҡыҙҙар ятҡанда ла, күрә алмағанда ла ысын, тәбиғи булып ҡала беләләр. Тәбиғәттең үҙе кеүек улар, ҡыланмайҙар. Сөнки тәбиғәт ҡыланғанды яратмай.

Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: беҙҙең ҡыҙҙар ҙа башҡалар һымаҡ таҫма телле, елбәҙәк булды икән, ти. Өҫтәүенә беҙҙең "ярты лаш сабый" ир-атты ла башҡалар ҡулға эйәләштерергә тора. Ул саҡта нимә булыр ине, тип уйлайһығыҙ? Йыллап түгел - айлап, айлап түгел - көнләп башҡалар араһында иреп юҡҡа сығыр инек. Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы - милләтебеҙ иммунитеты. Беҙ, ир-ат, ҡырыҫ була алмағаныбыҙ өсөн милләтте һаҡлаусы ошо сифатты мәжбүри рәүештә улар үҙҙәрендә булдыра. Милләт өсөн төп яуаплылыҡ та ҡыҙ-ҡатындарҙа. Шулай булғас, яуаплылыҡ еңел-елпе булмайҙыр инде.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров республиканың белем биреү учреждениеларында туҡланыуҙы ойоштороу мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары, профилле министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре, муниципаль берәмек башлыҡтары, мәктәп директорҙары, балалар баҡсаһы мөдирҙәре, шулай уҡ аутсорсинг нигеҙендә туҡланыу хеҙмәттәрен күрһәткән компанияларҙың вәкилдәре ҡатнашты. Кәңәшмә йомғаҡтары буйынса мәктәп туҡланыуын камиллаштырыу тәкдимдәре яңғыраны, шулай уҡ төбәк хөкүмәтенә бурыстар йөкмәтелде .

✓Михаил Киреев Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә кадрҙар белдереүе яһаны. "Тиҙҙән ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар йыйыуҙы территориаль ойоштороуға күсеүгә бәйле вәкәләттәрҙе яңынан бүлергә һөйләштек. Был ойоштороу социаль йәһәттән етди саҡырыу. Һеҙгә был эште координацияларға кәрәк", - тип мөрәжәғәт итте республика етәксеһе Михаил Киреевҡа.

✓Хәбәр итеүебеҙсә, Радий Хәбировтың "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы рәйесе - генераль директоры Олег Белозёров менән эш осрашыуында республиканың тимер юл йөктәрен ташыуҙы Өфө урау юлына күсереү тураһында тәҡдимен ҡарау буйынса эшсе төркөм ойоштороу хаҡында һөйләшеп килеште. Ул бындай ҡарарҙың иҡтисади яҡтан маҡсатҡа ярашлы булыу мәсьәләһен өйрәнергә тейеш.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары һәм уларҙың Пермь крайынан коллегалары төбәктәр араһындағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы һәм сиктәрҙе раҫланы. Бындай саралар әле тотош Рәсәйҙә уҙғарыла. Федераль закон ил субъекттары араһында килешеүҙәргә ҡул ҡуйыуҙы һәм уны төбәк законлары менән раҫлауҙы талап итә. Тиҙҙән республика башҡа күрше төбәктәр менән дә ошондай килешеүҙәргә ҡул ҡуйырға, Башҡортостан парламенты тейешле закондар ҡабул итергә тейеш. Был эште 2022 йылға тиклем тамамлау күҙаллана.

*БЫЛ АЙҘА...*

# ҮҘ ЙҮНЕБЕҘҘЕ...

## үҙебеҙ күрәйек

**Йыл ахырына яҡынлашып, ул бынан ун бер ай элек ҡуйған һорауҙарға яуап мәле лә килеп етте. Йылды хасил итеүсе айҙар теҙмәһенең һуңғы айы декабрь, йәғни, үҙебеҙсә әйткәндә, аҡъюлай, фенологтар телендә йыл тажы тип тә йөрөтөлә. Тик шуныһы: таж, ғәҙәттә, ниндәйҙер тантана, яуаплы мәл айҡанлы кейелә, ә йылыбыҙ "ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт" менән "йылп" итеп үтеп тә киткән, имеш. Йыл һөҙөмтәләре хаҡында алдағы һандарҙа һөйләйәсәк әле гәзитебеҙ, ә әлегә аҡъюлайҙың аҡ көндәрен барлап сығайыҡ, булмаһа: был ай календары ниҙәр вәғәҙә итә беҙгә? Әлбиттә, календарҙа планлаштырылмаған хәл-ваҡиғалар ҙа үҙ сиратын ала торор ай барышында: хәйерлегә, изгегә юрайыҡ уларҙы.**



Ай башы **Хоккей көнө** (1) менән асыла. Тимәк, йорт һәм мәктәп алдары майҙансыҡтарында балалар хоккейы старт ала. Эләр төшөп, йорттарға ут алғансы, тирләп-бешеп шайба һуғасаҡ улар. Нисә йылдар хәҙер был уйын популяр булыуҙан туҡтамай: юғары спорт кимәлендә лә, балалар-үҫмерҙәр донъяһында ла. Тик бына Третьяк, Петров, Михайлов, Харламов, Фетисовтар хаҡында, улар ҡабыҙған ватан хоккейы даны хаҡында беләме икән был балалар? Юҡтыр, хәҙер уларҙың телендә бөтөнләй икенсе фамилиялар: Америка һәм башҡа сит илдәр клубы өсөн уйнаусы миллиардер-хоккейсылар Малкин, Овечкин, Ковальчук исемдәре яңғырай. Һүҙ ҙә юҡ, һәләтле, көслө спортсылар, тик улар Рәсәй данын түгел, ә беҙгә ҡарата бигүк изге ниәттә булмаған илдәр данын күтәрә. Уларҙың донъя чемпиондары, ике-өс тапҡыр Стэнли Кубогы эйәләре булыуҙары беҙгә ни бысағыма? Ә бит фажиғәле һәләк булмаһа, Валерий Харламов, үҙе хыялланғанса, бына тигән тренер булыр ине. Заманында уны ла миллионлаған долларҙар вәғәҙә итеп, НХЛ-ға "ҡармаҡлап" ҡарағандар, тик ул илен аҡсаға һатыуҙан баш тартҡан. Ә бөгөн... Интернеттан легендар хоккейсының тормош юлынан бер мәғлүмәтте ҡарап алырға тип фамилияһын яҙып бөтөр-бөтмәҫтән, "Харламов Гарик, Харламов менән Бадрутдинов, "Камеди клаб" тигән белешмәләр килеп сыға башланы. Бына кемдәр икән бөгөнгө көн "геройҙары"... Үҙебеҙҙең "Салауат Юлаев" хоккей клубын иһә беҙ исеме өсөн генә яратабыҙҙыр, ә уйынсылары составында, исмаһам, бер егетебеҙ булһасы...

Аҡъюлайҙа шулай уҡ **Бөтөн донъя футбол көнө** (10) лә билдәләнә. Шуның менән спорт тураһында етеп торор, сөнки аҡъюлайҙың сәкән менән туп ҡыуыуҙан башҡа ла хәстәрлектәре күп. Мәҫәлән, **СПИД-ҡа ҡаршы көрәш көнө** (1). Бөгөн был хаҡта, ниңәлер, һирәгерәк яҙыла, ә йөғошло ауырыу йоҡтороусылар менәрләп теркәлә тора. Йыл башынан алып ошо сиргә дусар булған 2 203 кеше асыҡланған, ә сирлеләрҙең иҫәпкә ҡуйылған дөйөм һаны республикала - 20,5 меңдән ашыу. Йыл башынан асыҡланғанларының 1 339-ҙы - ир-егеттәр, 864-е - ҡатын-ҡыҙ, шуларҙың 79 процентҡа яҡыны СПИД-ты енси юл менән йоҡторған. Тағы ла шуныһы шаҡ ҡатыра: йыл башынан алып йөғошло сиргә тарыған әсәләрҙән 339 бала тыуған... Күрһәткестәр былтырғынан кәмерәк, тиһәләр ҙә, һандар үҙҙәре өсөн үҙҙәре бик күп нәмә тураһында һөйләй.

Яҙмышы шулдыр инде: ғүмер буйы көрәшеп йәшәне һәм йәшәр, ахыры, беҙҙең ил: совет заманында ла, бөгөнгө Рәсәй ысынбарлығында ла. Декабрҙә көрәштәрҙең дә көрәше **коррупцияға ҡаршы** (9) йүнәлтелә. Был көндөн халыҡ-ара кимәлдә билдәләнеүе Рәсәйҙәге хәлдәрҙе асыҡ күҙ алдына килтерергә ярҙам итә: Коррупцияға ҡаршы халыҡ-ара ойошма (TI) төҙөгән рейтинг буйынса Рәсәй 100 мөмкинлектән ни бары 29 балл йыйып, Доминикан, Гондурас, Лаос, Мексика, Парагвай кеүек илдәр менән бер рәттән, 180 баҫҡыстың 135-сеһендә тора. Дөрөҫ, бер нисә яңғырауыҡлы ҡулға алыуҙар был йәһәттән эш бара һымаҡ күрһәтеп торһа ла, дөйөм фон үҙгәрешһеҙ, тип әйтерлек ҡалып килә - ошондай күнелһеҙ һығымта яһай экспертар. Ошондай "форматта" **Кеше хоҡуҡтары көнө** (10) үгеҙҙе ҡыҙыл сепрәк менән үсекләүгә оҡшабыраҡ та китә түгелме? Әйҙәгеҙ, йәмәғәт, булмаһа, тәбиғәтебеҙҙең хазина-һәйкәлдәре - күнелдәрҙе юғарыраҡ күтәреүсе, беҙҙе таҙараҡ, ҡояшҡа яҡыныраҡ итеүсе тауҙарыбыҙ хаҡында һөйләшеп алайыҡмы әллә... тип әйтәйем генә тигәйнем, тереләй "тау ашаусы" ғибрәттәр иҫкә килеп төштө бит әй. Бында ла тын алырға ла бирмәйҙәр түгелме? **Халыҡ-ара тау көнө** (11) айырым һаҡлауға алынған тәбиғәт биләмәләребеҙҙе яҡлау - беҙҙең хоҡуғыбыҙ ҙа, бурысыбыҙ ҙа ул, тип раҫлай алабыҙ, сөнки был хаҡта РФ Конституцияһында аҡҡа ҡара менән яҙылған (12 декабрь - **РФ Конституцияһы көнө**). Башҡа хоҡуҡтарыбыҙ тулаулегә әйләнеп бөтөп бара бит, юғиһә. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер хоҡуҡтарыбыҙ һәм бурыстарыбыҙҙы, урындағы хәлдәрҙән сығып һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының аныҡ статьяларына таянып, республиканың күп милләтле халыҡтары мәнфәғәтендә хәл итеүҙә ныҡышмалыраҡ та эшләй алыр инек, буғай. Был Башҡортостан Республикаһының дәүләт милкендә булған ерҙәребеҙ, ер аҫты байлыҡтарыбыҙ, һыуҙарыбыҙ, урмандарыбыҙ, тәбиғәт ҡомартҡыларыбыҙ яҙмышына ҡағыла бигерәк тә. Күп милләтле республикала һәр халыҡтың әсә теле проблемаларын хәл итеү ҙә беҙҙең БР Конституцияһы тарафынан гарантиялана һәм көйләнә. Әйткәндәй, 24 декабрҙә **БР Конституцияһы көнө** (1993) ошо хаҡта, шулай уҡ Төп Законыбыҙҙың халҡыбыҙға бирген мөмкинлектәрен файҙаланыу тураһында уйланып алыу бер кемгә лә зыян итмәҫ, киреһенсә, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе ығы-зығыһыҙ, аңлашыу юлы менән хәл итеүгә булышыр ине....

Әйтелгәндәрҙән тыш, был айҙа тағы ла Юристар (3), Халыҡ-ара инвалидтар (3). Информатика (4), Ирекмәндәр, шул уҡ көндә Иҡтисад һәм социаль үҫеш хаҡына халыҡ-ара ирекмәндәр (5), Граждандар авиацияһы (7), Бөтөн донъя балалар тедевидениеһы һәм радиоһы (8), Халыҡ-ара сәй (15), ЗАГС хеҙмәткәрҙәре (18), Фәҡирҙәргә халыҡ-ара ярҙам (19), РФ Пенсия фонды (22), РФ ҡотҡарыусылар (27) һәм Халыҡ-ара кино (28) көндәре лә билдәләнә.

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**12** - Башҡортостандың халыҡ шағиры, әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, 1995-2011 йылдарҙа БР Яҙыусылар берлегенең идара рәйесе, С. Юлаев исемендәге БАССР премияһы лауреаты, бик күп ордендар кавалеры **Рауил БИКБАЕВҡа - 80 йәш** (1938).

**15** - шағир, фольклорсы, драматург, башҡорт әҙәбиәте классигы, БАССР-ҙың халыҡ сәсәне **Мөхәмәтша БУРАНҒОЛОВтың тыуыуына - 130 йыл** (1888-1966).

- СССР-ҙың халыҡ артисы, 1934-1977 йылдарҙа М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры режиссеры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, бик күп ордендар кавалеры **Арыҫлан МӨБӘРӘКОВтың тыуыуына - 110 йыл** (1908-1977).

**17** - телсе ғалим, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры, БР Фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Ғәли СӘЙЕТБАТТАЛОВтың тыуыуына - 90 йыл** (1928-2010).

**24** - йырсы, 1953-1978 йылдарҙа Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Мәғфирә ҒӘЛИЕВАның тыуыуына - 90 йыл** (1928-2016).

**26** - педагог, партия һәм дәүләт эшмәкәре, 1955-1971 йылдарҙа БАССР мәғариф министры **Фатима МОСТАФИНАның тыуыуына - 105 йыл** (1913-1998).

**29** - совет партия һәм дәүләт эшмәкәре, БАССР Яҙыусылар берлеге ағзаһы, Башҡортостандың Ваҡытлы революцион Советын ойоштороусыларҙың береһе, 1935-1937 йылдарҙа мәғариф буйынса БАССР халыҡ комиссары, яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның ире **Ғөбәй ДӘҮЛӘТШИНдың тыуыуына - 125 йыл** (1893-1938).

Шул да мәғлүм булһын: **21** декабрҙә **Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика мәктәп-гимназияһы асылыуға 75 йыл** тула.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔"Башинформ" агентлығы хәбәр итеүенсә, "Рәсәй транспорты" халыҡ-ара форумында республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Росавтодор" етәксеһенә юлдың күперҙән алып М5 трассаһы менән сиселешкә тиклемге өлөшөн федераль милеккә ҡабул итергә тигән тәҡдим индерҙе. Был осраҡта ҡала бюджеты һиҙелерлек "кәмейәсәк". "Росавтодор" башлығы Андрей Костюк тәҡдимде хупланы.

✔Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында депутаттар һәм юғары уҡыу йорттары вәкилдәре маҡсатлы уҡытыуҙың закон сығарыу базаһын тикшерҙе. Билдәләнеүенсә, вуздар, эш биреүселәр һәм белем алыусылар өсөн маҡсатлы уҡытыу тураһында положение юҡ. Юғары уҡыу йорттары нигеҙ итеп алырлыҡ төп документтың булыуы мөһим. Рәсәйҙең ҡайһы бер субъекттарында ул әҙерләнгән, күршеләрҙең тәжрибәһен өйрәнергә кәрәк, тигән тәҡдим әйтелде. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар маҡсатлы белем биреү тураһында договор һәм өс яҡлы килешеү төҙөргә ҡарар итте.

✔Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Йомарт шишәмбе" халыҡ-ара мәрхәмәтлек көнөндә ҡатнашты. Улар бер көнлөк эш хаҡын Серафимовка балалар йорт-интернатына күсерергә хәл итте. "Йомарт шишәмбе" Халыҡ-ара мәрхәмәтлек көнө 2012 йылдан ноябрҙең һуңғы шишәмбеһендә 100-ҙән ашыу илдә үҙғарыла.

✔Башҡортостан Хөкүмәтендә "Башҡортостан" киностудияһына Әмир Абдразаҡовтың исемен биреү тураһында бойороҡ әҙерләнгән. Әмир Ғәбделмән улы Абдразаҡов - башҡорт актёры, сценарист һәм кинорежиссер. Ул 50-гә яҡын телевизион фильм төшөргән, шул иҫәптән Башҡортостан телевидениеһында тәүге тапҡыр Я.Хамматовтың "Бөртөкләп йыйыла алтын" (1979) һәм Ғ. Ибраһимовтың "Кинйә" (1986) романдары буйынса күп сериялы нәфис телефильмдар.

✔Өфөлә М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының рус труппаһы Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" драмаһын ҡуйҙы. Был ваҡиға республиканың 100 йыллығына һәм Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның 110 йыллыҡ юбилейына арнала. Сәхнә әҫәре ижади проекттар өсөн республика субсидияһына ғәмәлгә ашырылды.

БАШ ҠАЛАМ

# МАҠТАУ ҺҮҘЕ

**Тыуған ерҙән торған ер яҡшы, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәрҙер. Сығышым менән Силәбе өлкәһенең Аргаяш районынан булһам да, мин күптән инде Өфө кешеһе. Минең кеүек, ҡалала йәшәүсе һәр кем уны яраталыр, тип уйлайым.**

Рәсәйҙең боронғо, бай тарихлы күп ҡалаларында булғаным бар. Улар араһында минең ҡалам үҙенең мәҙәниәте менән айырылып тора һәм был да мөһим тарихи әһәмиәтҡә эйә. Бында ижади мөхит һәм ижади кешеләр тупланған, бында яңы идеялар тыуа, тиер инем. Беҙҙә театр сәнғәте юғары баһалана. Шулай уҡ художество сәнғәте ҙур урын алып тора. Башҡа ҡалаларҙа фото сәнғәте ниндәйҙер торғонлоҡ кисерһә, беҙҙә, киреһенсә, фотогалереялар бар, яңылары асыла һәм был өлкә һәр ваҡыт алға табан бара, камиллаша. Һанай китһән, тағы әллә күпме нәмәләрҙе билдәләргә мөмкин, әммә беҙгә ошо ҡаҙаныштарыбыҙ менән федераль субъекттың баш ҡалаһы ғына булып ҡалырға ярамай, беҙ донъя кимәлендә сығырға, донъя иғтибарын яуларға тейеш.

Башҡортостан, тигәндә, бөгөн Салауат Юлаевты, йәғни уның үҙен түгел, батыр исеме менән аталған хоккей клубын ғына беләләр. Әлбиттә, мин команданы яратам, уның фанатымын, әммә был ғына аҙ, башҡа баҙарҙарҙы ла яуларға кәрәк. Өфөнө мин Санкт-Петербург менән йәнәш ҡуйыр инем, сөнки улар икеһе лә мәҙәни ҡала. Питер ҙа ҡыҙыҡлы, кешелекле. Мәскәүҙә финанс йәһәтенән яңы мөмкинлектәр бар, шуға күрә йәштәр баш ҡаланан Мәскәүгә, башҡа ҙур ҡалаларға китә икән, йәш ваҡыттарында китһендәр, аҡса эшләп, тәжрибә туплаһындар. Әммә кире Башҡортостанға, Өфөгә ҡайтһындар.

**Ғәлиә ҒАРИПОВА.**

# ТӘНҠИТ ТӘ БАР

**Ниндәй генә ҡаланы алып ҡарама, уларҙың туристарҙы йәлеп итерҙәй тарихи урындары, комплекстары бар. Булмағандары боронғо тарихын тергеҙергә, булғандарын һаҡларға тырыша.**

Өфөлә Ҡышҡы һарай ҙа, Сөйөмбикә манараһы ла, Кремль диуарҙары ла юҡ. Артабан да булмаясаҡ. Сөнки быға саҡлы борондан ҡалған диуар, йорттарҙың йәлап ҡына серәп емерелгәнен битараф ҡына күҙәттеләр. Һуңынан тәҙәүселәр килде. Барыһы ла тиерлек Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай йәки Өфө ҡала Советы депутаттары. Рәсми рәүештә, әлбиттә, төҙөлөш компаниялары менән улар үҙҙәре етәкселек итмәй - балалары, ҡатындары, туғандары. Шулай итеп, Өфө тарихи үҙәкһеҙ ҡалды. Бер ниндәй бөтөнлөк юҡ: төҙөлөш, тупаҫ декорациялар... Халыҡҡа бәхет өсөн йылы бәҙрәфтәр, аҙым һайын эшләгән магазиндар һәм парковкалар, ҡыҫҡаһы, коммуналь ожмах ҡына кәрәк тип уйлаусылар яңылыша. Ҡалабыҙҙан ҡасыусы йәштәр ҙә быңын күрһәткесе булып тора. Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа, Екатеринбургҡа ҡуртымға фатир алып йәшәү шарты менән булһа ла ҡасалар. Кешеләрҙең күңеленә ҡармаҡ һалырлыҡ бер нәмә лә ҡалманы тиерлек. Боронғолокто емереү эшмәкәрлеге барыһы ла закон нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Судтар аша. Бына, мәҫәлән, Өсөнсө йәмиғ мәсете эргәһендәге имам Сатаев йорто. Муниципаль ихтыяж өсөн алынған. Ә ҡаланың ниндәй ихтыяжы булыуын судта бер кем дә аныҡ ҡына аңлата алманы. Шулай уҡ йортто закон буйынса емерергә ярамаған йорт төҙөүсегә нимәгә кәрәклеген дә аңлатманылар. Моғайын, йортто башҡа хужаһыҙ объекттар иҙмышы көтәлер. Емерелер йәки янып китер, бик булмаһа, эргәләге төҙөлөштә эшләүсе экскаватор "яңылыш ҡына сүмесе менән ҡағылыр". Өфөлә архитектура һәйкәлдәре менән бындай хәлдәр булып тора.

**Олеся ҒҮМӘРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘСӘЙҘӘРГӘ...



**Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров күп балалы әсәләрҙе "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләне. Биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға республика наградаһы 20 йыл дауамында тапшырыла. Миҙалға өҫтәп, һигеҙ мең һум самаһы аҡсалата премия бирелә. Әлеге көндә Башҡортостанда ете меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙҙың ошондай наградаһы бар. Был юлы тағы 44 гүзәл зат республика етәксеһе ҡулынан миҙал алды.**

- Республикабыҙҙа 50 меңдән ашыу күп балалы әсә бар, дөйөм алғанда, улар 160 меңдән ашыу бала тәрбиәләй, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Һуңғы ваҡытта киҫкен торған демографик мәсьәләне лә хәл итеүсе бик ҙур армия был. Хеҙмәтегеҙ, матур балалар тәрбиәләүегеҙ, балаларҙың йылы, изге мөхиттә, һәйбәт кешеләр булып үҫеүе өсөн һеҙгә рәхмәт әйтхем килә. Шуның өсөн һеҙҙең алда баш эйәм һәм оло рәхмәтемде белдерәм! Беҙ һеҙ һәйбәт йәшәһен өсөн күп көс һалырбыҙ. Беҙҙә һаулыҡ һаҡлау - тейешле кимәлдә, медицина хеҙмәтләндереүе - сифатлы, мәктәптәр - һәйбәт, уҡытыу - бер сменала, уҡытыусылар яҡшы булһын, балаларығыҙ спорт, мәҙәниәт менән шөғөлләнә алһын өсөн социаль инфраструктураны үҫтереүгә етди иғтибар бүлербеҙ. Тормошоғоҙҙо аҙ ғына булһа ла еңеләйтеү өсөн тырышырбыҙ, тип вәғәҙә бирәм. Беҙ - етәксе буларак мин һәм республика етәкселеге - Башҡортостан иҡтисады һәйбәт эшләһен, ирҙәрегеҙ һәм аҙаҡтан балаларығыҙ лайыҡлы, яҡшы хеҙмәт хаҡы түләнгән эш тапһын, яҡшы тормош эҙләп ситкә китмәһен, республикабыҙҙың шәп ул һәм ҡыҙҙары бында ҡалһын өсөн бар көсөбөҙҙө һалырбыҙ...

# ЯРҘАМ КӘРӘК!

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров Рәсәй төбәктәренең башҡа губернаторҙары менән бергә Ялтала Рәсәй Президенты Владимир Путин үткәргән Дәүләт советы президиумының киңәйтелгән ултырышында ҡатнашты.**

Рәсми булмаған диалог барышында Рәсәй Федерацияһы Президентының 2024 йылға тиклем милли маҡсаттар һәм стратегик бурыстар тураһындағы Указында билдәләнгән мәсьәләләр ҡаралды. "Рәсәй Президентының 2024 йылға тиклемге милли проекттары. Нисек итеп барыһына ла (шул иҫәптән минең дөрөҫ балама ла) ошо хаҡта еткерергә икән? Уның әһәмиәтен әлегә белмәйҙәр, әммә бының илде үҫтереүҙә ҙур аҙым буласағына ныҡлы ышанам, - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә. - Дәүләт халыҡҡа йәшәү шарттарының яҡшырыуын тойһон, лайыҡлы хеҙмәт хаҡы, пособиелар, сифатлы һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, мәҙәниәт, спорт, таҙа тәбиғәтте тәьмин итеү, һәммәбеҙҙе лә борсоған мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн 6 йылға 28 триллион һум аҡса бирә. Был - барыһының да өмөттәрен аҡлау мөмкинлеге... Аҡсаны урлауға юл ҡуймаҫбыҙ. Бында минә һеҙҙең ярҙамығыҙ кәрәк".

# ЮЛДАР, КҮПЕРҘӘР...

**Дөйөм ҡулланылыштағы федераль әһәмиәтле М-5 "Урал" юлына Өфөнөң яңы сығыу юлын (Көнсығыш сығыу юлы) һалыу буйынса күләмле инвестиция проекты Рәсәй дәүләт экспертизаһының ыңғай һығымтаһын алды. Был хаҡта Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.**

Хәбәр ителеүенсә, проектты концессия формаһында тормошҡа ашырырға ниәтләйҙәр. Уҙған йылдың йәйендә Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында республика Хөкүмәте һәм "Башҡортостан концессия компанияһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте ошо хаҡтағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Инвестицияларҙың дөйөм күләме 34 миллиард һум самаһы тәшкил итә. Концессия килешеүенең ғәмәлдә булыу ваҡыты - 25 йыл. Уның дүрт йылы транспорт коридорын төҙөүгә бирелә. Килешеү объектына автомобиль юлы тоннеле, Өфө йылғаһы аша күпер, ошо күперҙән федераль әһәмиәттәге М-5 "Урал" юлына тиклемге юл участкаһы, шулай уҡ аҡса алыу пункты һәм юл-файҙаланыу предприятиеһы инә. Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында белдереүҙәренсә, әлеге күләмле проекты ғәмәлгә ашырыу Өфө ярымутрауы биләмәһенән өҫтәмә сығыу юлын һалырға мөмкинлек бирергә, был иһә водителдәр өсөн шәп мөмкинлек булырға тейеш.

# ЭШЛӘМӘҺӘҢ ДӘ...

**2019 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә эшһеҙлек пособиеһы 2009 йылдан алып тәүге тапҡыр һиҙелерлек арта, тип белдерҙеләр Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты эш менән тәьмин итеү министрлығында.**

Киләһе йылдың ғинуарынан эшһеҙлек пособиеһының иң аҙы - 850-нән 1500 һумғаса, иң күбе 4900-ҙән 8000 һумға тиклем арттырыла.

"Башҡортостанда, Урал коэффициентын иҫәпкә алып, яңы йылдан эшһеҙлек пособиеһының иң аҙы - 1725 һум, иң күбе 9200 һум була. Әлеге ваҡытта республикала ошо пособиеның минималь күләме Урал коэффициенты менән бергә 977,5 һум, максималь күләме иһә 5635 һум тәшкил итә", - тип хәбәр иттеләр министрлыҡтан. Бынан тыш, 2019 йылдан тәүге тапҡыр пенсия алды йәшендәге граждандар өсөн эшһеҙлек пособиеһы индерелә. Улар өсөн пособиеның иң аҙы - 1500 һум, иң күбе 11 280 һум, йәғни 2018 йылдың икенсе кварталында эшкә һәләтле халыҡтың йәшәү минимумы дәүмәленән 100 процент тәшкил итә. Башҡортостанда, Урал коэффициентын иҫәпкә алып, пенсия алды йәшендәгеләр өсөн эшһеҙлек пособиеһының максималь күләме 12 972 һум булырға тейеш. Ағымдағы йылдың ноябрь башына төбәктә 17,8 мең рәсми теркәлгән эшһеҙ иҫәпләнгән. Былйыл башы менән сағыштырғанда 13,7 процентҡа аҙыраҡ. "Рәсми" эшһеҙҙәрҙең дөйөм һанынан 62 проценты тиерлек - ҡатын-ҡыҙҙар.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Өфө бюджеты 2019 йылда Өфө - Аэропорт трассаһын тәртиптә тотоуға 127 миллион һумға яҡын аҡса булә. Ҡала властары 14 декабрҙә подрядсы һайлап алыу өсөн аукцион уҙғара. Тендер документтарынан күренеүенсә, был сумма шулай уҡ Дим юлын, Мелькомбинат ҡасабаһына һәм "Мега" сауҙа үҙәгенә инеү юлын, Ағиҙел аша ике күперҙе тәртиптә тотоуға йүнәлтелә. Бынан алда Өфө - Аэропорт трассаһын ҡарауға контракттарҙы "СУРСИС" муниципаль унитар предприятиеһы алғайны.

✔Оператив кәңәшмәлә уҙған ял көндәрендә 27 мең кубометрҙан ашыу ҡар массаһы сығарылыуҙары билдәләнде. Миҙгел башынан ҡаланан 40 мең кубометрҙан ашыу ҡар сығарылған. Ҡарҙың күпләп яуыуы Өфөнөң ҡала хеҙмәттәренә йөкләмәне арттырҙы. Бөгөн ҡаланы таҙартыу эшенә яҡынса 300 берәмек техника һәм ике мең самаһы торлаҡ-коммуналь өлкә хеҙмәткәре йәлеп ителгән. Ошо көндәрҙә Өфөгә бөтәһе 39 берәмек ҡар таҙартыу техникаһы ҡайтарыласаҡ.

✔Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин әйтеүенсә, эргә-тирәләге биләмәләрҙе, парковкаларҙы, ҡыйыҡтарҙы боҙҙан һәм ҡарҙан таҙартыу өсөн милекселәр һәм ошо биналарҙы ҡуртымға алыусылар яуап бирә. Торлаҡ хужалығы идаралығы директоры Раил Мирхәйҙәров, юлдарҙы сифатлыраҡ таҙартыу өсөн ҡала хеҙмәттәре автомобиль хужаларына шәхси автотранспортты ярамаған урындарҙа, юл буйҙарында ҡалдырмауҙарын һорап мөрәжәғәт итте, тине.

✔Өфөләге Конгресс-холда йылдың иң сағыу ваҡиғаларының береһе - VI "Дуҫлыҡ гөлләмәһе" республика фестиваленең гала-концерты булды. Марафон ғинуар айында башланды. Йыл дауамында республикала "халыҡ" һәм "өлгөлө" тигән маҡтаулы исемгә эйә коллективтар сығыш яһаны. Республика халыҡ ижады үҙәге белгестәре 20 меңдән күберәк кеше, мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларының мең художестволы үҙешмәкәрлек коллективы, һәүәҫкәр берекмәһе ҡатнашҡан 6 меңдән ашыу ижади номерҙы ҡараны.

✔Марсель Байдәүләтов Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика идаралығы етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Оператив кәңәшмәлә баш ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин матбуғат хеҙмәтенең яңы етәксеһе менән таныштырҙы. Әлеге тәғәйенләүгә тиклем ул Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәтендә эшләне.

✔ *15 декабргә инде маршруттағы транспортты һәм интервал араһын аныҡ күҙәтергә мөмкин буласаҡ. Өстәүенә, туҡталыштарҙа автобустың ҡасан, нисә минуттан килеп етәсәге махсус таблола яҙылып барһа, бөтөнләй шәп буласаҡ.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Был аҙнала ҡала округы хакимиәтендәге оператив кәңәшмәнең тәртибе бер аҙ үҙгәрешкә дусар булды. Ғәҙәттә, быға тиклем уҙған аҙналағы мөһим ваҡиғаларға һәм сараларға байҡау яһалһа, әле ул контролгә алынған мәсьәләләр буйынса яуаплы вазифа биләүселәрҙең отчетынан башланды.**

# ЙОҠОНАН ЯҘҘЫРҘЫ БЫЛ ҠАР...

Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары - Транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Андрей Федосов һуңғы ваҡытта етди иғтибар үҙәгендә торған пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү проблемаһының нисек хәл ителеүе хаҡында бәйән итте. "25 октябрҙән күҙәтеү-тикшереү саралары үткәрелде. 22 ноябргә тиклем ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре пассажир автобустары водителдәренә транспорт сараларының техник торошо буйынса 3000 самаһы административ документ төҙөнө. Шуларҙың 93-өнөң даими маршрут картаһы булмауы асыҡланды. 73 транспорт сараһына арест һалынды. Һөҙөмтәлә 27 маршрут буйынса пассажирҙар ташыуға рөхсәте булмайынса эшләүселәр эштән туҡтатылды. Шаҡша, Затон, 8 Март, Нижегородка, Яңы Максимовка һәм башҡа алыҫта ятҡан бистәләрҙә транспорт хеҙмәтләндереүе проблемалары бар ине. Уларҙа рөхсәте булмағандар бер үк ваҡытта эш туҡтатҡас, транспорт коллапсы килеп тыуҙы. Әлеге ваҡытта, маршруттар араһында транспорт сараларын бүлеү һөҙөмтәһендә, проблема хәл ителде. Күрелгән саралар һөҙөмтәһендә 21 рәсми маршрут буйынса хәрәкәт тергеҙелде, 18 маршруттың хәрәкәт схемаһы үҙгәртелде. Ете маршрутта транспорт саралары һаны арттырылды. 23 ноябргә ҡарата Өфө ҡалаһы территорияһында 102 муниципаль маршрут бар. Уларҙың 45-е - көйләнгән тариф маршруттары ("Башавтотранс" автобустары, троллейбустар, трамвайҙар), 57 маршрутты дәүләт милкендә булмаған транспорт хеҙмәтләндерә. Әлеге көндә баш ҡалала 2600 берәмек пассажир транспорты иҫәпләнә, шуларҙың 1100-ө - шәхси милеккә ҡарай", - тине ул.

Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин халыҡты борсоған һорауҙарҙы күтәрмәй ҡалманы: "Башавтотранс" маршруттарында яңы автобустар сыҡҡанмы, автобустар ниндәй интервал менән йөрөй, туҡталыштарҙа уларҙы халыҡ оҙаҡ көтәме? Андрей Александрович белдереүенсә, әле барлыҡ транспорт ГЛОНАСС системаһына индерелә, 15 декабргә инде маршруттағы транспортты һәм интервал араһын аныҡ күҙәтергә мөмкин буласаҡ. Өстәүенә туҡталыштарҙа автобустың ҡасан, нисә минуттан килеп етәсәге махсус таблола яҙылып барһа, бөтөнләй шәп буласаҡ. Ә бит бындай күренеш хәҙер Европа илдәрендә генә түгел, Рәсәй ҡалаларында ла күҙәтелә. Пассажирҙар өсөн бик унайлы, ҡасан автобусым килер икән тип баш ҡатырып, көйөп тормайһың, таблола барыһы ла ап-асыҡ күренә.

Хәл ителеше кәңәшмә һайын көн үҙәгендә торған икенсе проблема - урамдарҙың яҡтыртылыуы. Был тармаҡтағы үҙгәрештәр менән "Өфөгорсвет" МУЭП-ы директоры Илдар Чанышев таныштырҙы. Илдар Хәмид улы белдереүенсә, бөгөнгә 8 объект, шул иҫәптән 3 балалар баҡсаһы һәм 1 мәктәп яҡтылыҡ сығанағына тоташтырылған, 5 объект муниципаль милеккә күсерелгән. Әле 45 объект буйынса эштәр алып барыла, яҡтыртылмаған урындар, объекттар һаны асыҡлана. Улар киләһе йылда тормошҡа ашырыласаҡ планға индерелә.

Быға тиклем ал да гөл һымаҡ күренгән медицина хеҙмәтләндереүе өлкәһе проблемалары ла власть алмашыныу менән ҡапыл ҡалҡып сыҡты. Әммә медицина мәсьәләләре муниципалитет мәнфәғәтендә түгел, шулай булһа ла ҡалаҡ муниципаль райондарҙа йәшәй, тимәк, проблемаларҙы асыҡларға һәм республика Хөкүмәте кимәленә күтәрергә кәрәк. Ә проблемалар етерлек. Мәҫәлән, хакимиәттең халыҡтың сәләмәтлеген һаҡлау бүлеге начальнигы Рәдиф Сабиров белдереүенсә, улар Инвестиция-төҙөлөш комитеты МУП-ы белгестәре менән берлектә смета төҙөү өсөн 10 фельдшер-акушерлыҡ пунктын ҡабат тикшереп сыҡҡан. Был объекттарҙың 5-һе ремонт талап итһә, ҡалған 5-һен һүтеп, яңынан төҙөргә кәрәк. Карпов, Самохваловка ауылдарын берләштергән һәм киләсәктә халҡы 8 мең кешегә етеүе күҙалланған Федоровка ауылында амбулатория төҙөүгә ихтыяж бар. Барлыҡ был эштәр яҡынса 24,5 миллион һум сығым талап итә. Әлегә был яҡынса сумма, уның үҙгәреүе лә ихтимал...

Ҡыш етһә, ҡала халҡы өсөн дә, ҡала хеҙмәттәре өсөн дә һынауҙар башлана, сөнки ҡасан ҡар яуыры йәки уның туҡтарын бер Хоҙай ғына белә. Ул да ҡартайған, ахыры, ҡайһы берҙә самаһын онотоп ташлай: йә ҡарһыҙ аптырата, йә туҡтатырға онота... Ошо көндәрҙәге ҡапыл яуған ҡар коммуналь хеҙмәттәргә етди һынау алдына уҡ ҡуймаһа ла, йөҡоларынан яҙҙырҙы. Сөнки бындай осраҡта улар тәүлек әйләнәһенә эшләй. Кварталдар эсен таҙартыу ҙа иғтибар үҙәгендә. "Башҡортостан Республикаһының Өфө ҡалаһы ҡала округының Торлаҡ хужалығы идаралығы" МБУ-һы директоры Раил Мирхәйҙәров белдереүенсә, йорт эргәләрендәге территорияларҙы таҙартыуға 130 тәгәрмәсле трактор йәлеп ителә, ҡайһы берҙә өҫтәмә көс ситтән саҡырыла. 858 урам һепереүсе ҡар менән көрәшә, сәғәт 9-ҙан һуң уларға ярҙамға слесарҙар, сүп-сар йыйыусылар, иҙән йыуыусылар, йәмғеһе 410 кеше, сыға.

1 декабрҙән әлеге ваҡытта идара итеүсе компанияларҙың, Өфө ҡалаһының Торлаҡ хужалығы идаралығы МБУ-һы сайтына ҡуйылған графикка ярашлы ихаталар комплексы таҙартыла башлаясаҡ. Был эш быйыл өсөнсө йыл дауам итә һәм ҡыйыҡтарҙы, балкондар өҫтөнә үҙаллы эшләп ҡуйылған козыректарҙы (бөгөн бындай ҡоролмалар 12800), балалар майҙансыҡтарын, парковкаларҙы таҙартыуҙы үҙ эсенә ала. Инде халыҡ был эшкә күнегеп, ихаталарҙы таҙартҡанда транспорт сараларын ваҡытлыса алып торорға тейеш, сөнки ихатаны трактор менән таҙартҡанда улар эшкә ҡамасаулай. Әммә йыл да битарафтар йәки күршеләренә ихтирамһыҙлыҡ күрһәтеүселәр табылып тора. Быйыл да шундай күренештәр булмаһын өсөн райондарҙың йәмәғәт советтары менән осрашып, һөйләшеүҙәр, аңлатыу эштәре алып барыла.

Ҡала хакимиәте башлығы, ғөмүмән, был мәсьәләнең Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың иғтибар үҙәгендә булыуын билдәләп, граждандар тарафынан ниҙәтеүҙәр булдырмаҫҡа тырышырға ҡушты. Әлбиттә, урамдарҙы таҙартыу өсөн махсус техника ла етешмәй, был йәһәттән, хакимиәт башлығы урынбаҫары Салауат Хөсәйенов белдереүенсә, ошо аҙнала уҡ 4 берәмек ҡышҡы эштәр өсөн тәғәйенләнгән техника килергә тейеш. Дөйөм алғанда, технопарктың 39 берәмеккә тулыланыуы көтөлә.

Шулай уҡ кәңәшмәлә ҡала төҙөлөшө сәйәсәте, уның тышҡы биҙәлеше, дизайнстратегияһы, тышҡы реклама баҙарын үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды һәм яңы бурыстар билдәләнде.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҺОРАУ - ЯУАП



## ҮҘ ИҪӘБЕҢӘ ЯЛ

**Мин эшләп йөрөүсе пенсионер. Ғаилә хәлдәре буйынса үҙ иҫәбемә 1 көн ял биреүҙе һорап, эш биреүсемә мөрәжәғәт иттем, ләкин ул бер көнлөк отпуск булмай тип баш тартты. Уның быға хоҡуғы бармы?**

- Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, хеҙмәткәрҙең үҙ иҫәбенә алырға теләгән ялдың минималь күрһәткесе билдәләнмәгән. Шулай итеп, хеҙмәткәр үҙ теләге буйынса ундай ялды хатта бер сәғәткә лә алырға мөмкин. Бының өсөн ул тейешле ғариза менән етәксеһенә мөрәжәғәт итергә тейеш. Ләкин бындай осраҡта етәксенең әлеге ялды бирергә хоҡуҡлы, әммә тейеш түгеллеген оноторға ярамай. Шулай ҙа эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға (йылына 14 көнгә тиклем), эшләүсе ғәриптәргә (60 көнгә ҡәҙәр), Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға (35 көнгә тиклем), хәрби йәки таможня хеҙмәткәре булып, эш ваҡытында һәләк булғандарҙың ҡатындарына (14 көнгә хәтлем) теләгән ваҡыттарында эш биреүсе үҙ иҫәбенә ял бирергә бурыслы. Шулай уҡ никахҡа торғанда, яҡын туғаны вафат булғанда, бала тыуғанда, хеҙмәткәрҙең теләге буйынса 5 көн дауамында түләнмәгән ял биреү мотлаҡ. Юғары уҡыу йортонда диплом яҡлағанда (4 ай), инеү имтихандары тапшырғанда (ВУЗ-ға - 15, училище - 10 көн), дәүләт имтиханы тапшырғанда (уҡыу йортонон ниндәй булыуына ҡарап, 1 йәки 2 ай) шулай уҡ ял бирелергә тейеш.

## АУЫРЫҒАН ӨСӨН...

**Өсөнсө ай ауырып эшкә сыға алмайым. Кадрҙар бүлегенән шылтыратып, эшкә сығыуымды йәки эштән китеүемде талап итәләр. Әгәр ҙә үҙ теләгем менән китергә ғариза яҙмаһам, улар мине эштән бушата аламы?**

- Ауырыу һөҙөмтәһендә йыш йәки оҙаҡ эшкә йөрөй алмаған өсөн эш биреүсе хеҙмәткәрҙе үҙ теләге менән эштән бушата алмай. Бының өсөн хеҙмәткәр үҙе ғариза яҙырға тейеш. Йәки эш биреүсенең ҡулында хеҙмәткәрҙең һаулығы торошона ярашлы әлеге һөнәре буйынса эшләй алмауын дәлилләгән медицина һығымтаһы булыуы мотлаҡ. Шулай уҡ хеҙмәткәрҙең сирләгән ваҡытында ла уны эштән бушатыу ҡәтғи тыйыла.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һомғол муйын өсөн

❖ Ҡатын-ҡыҙҙың умыртҡа бағанаһының муйын өлөшөндә май ҡатламы үҫеүсән. Был бигерәк тә өлкәнәйә барған һайын күҙәтелә. 3 ҡалаҡ зәйтүн майына 1 сей йомортҡаны, 1 ҡалаҡ 6 процентлы аш һеркәһен ҡушып болғатығыҙ ҙа, килеп сыҡҡан ҡыләмдә скипидар өҫтәгеҙ. 15-20 минутҡа һылайбыҙ һәм йылы һыу менән йыуып алабыҙ. Хәлегеҙ еңеләйгәнсе эшләгеҙ.

### Иммунитет өсөн

❖ Иртән ғәҙәти сәй урынына корица ҡушылған сәй эсегеҙ. Ул организмды таҙарта һәм иммунитетты нығыта. Ҡайнар һыуға 1 киҫәк лимон һәм бер семтем корица һалырға, һыу бер аҙ һыуынғас 1 ҡалаҡ бал болғатып эсәбеҙ.

❖ 2 лимондың тышын ҡырғыста ҡырырға, 200 грамм шәкәр ҡушып болғатырға. 4 лимондың һутын һығырға, шәкәрҙе ҡушып, болғатырға. 4 йомортҡаны сәнске менән күпертмәйенсә туҡырға, һутҡа өҫтәргә һәм ярты сәғәткә ултыртып торорға. Һөҙөргә һәм кәстрүлгә ҡойорға, 40 грамм аҡ май өҫтәргә, талғын утта 3-5 минут ҡуйырғансы ҡайнатырға. Һыуытырға һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Лимондың ҡабығында С витамины күп, ул капиллярҙарҙың торошон яҡшырта. Лимон бауыр эшен көйләй, йомортҡала холин бар, ул шулай уҡ бауырға файҙалы. Аҡ майҙа А витамины күп. Был лимонлы майҙы вирустар әүҙемләшкән мәлдә ҡулланыу тағы ла яҡшы.

### Йәшлек эликсиры

❖ 100 мл лимон һуты, 200 г бал, 50 г зәйтүн майын ҡушып болғатырға. Ас ҡарынға 1-әр балғалаҡ ашарға. Бит тиреһе матурайып, күҙҙәр ялтырап китер, ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлеге лә көйләнер. Хәтер яҡшыртыу өсөн яҡшы эсул.

### Йүткереү

❖ 1 стакан ҡайнар һөткә саған төнәтмәһе өҫтәп эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✔ *Кәрһеҙ ҡалғанда һине көнө-төнө аралашҡан хеҙмәттәштәрең дә, донъя күсәре кеүек булған етәксең дә, иң яҡын дуҫтарың да, бөтөн иғтибарыңды алған идеяларың да ҡарамаясаҡ, һин үҙең үк әүәләгән балаларың ҡулына ҡаласаҡһың.*



*ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ*



*Константин УШИНСКИЙ*

# ҒӘҘӘТМЕ?

## Ул ябай сифат түгел

Балала насар ғәҙәт башланыу ҙа тәбиғи хәл. Әммә насар ғәҙәтте бөтөрөү яңыны өйрәтеүгә ҡарағанда ауырыраҡҡа тура килә. Даими дөрөҫ тәрбиә алып барылһа ғына ҡайһы бер насар ғәҙәттәр үҙенән-үҙе онотола, ә инде исем өсөн генә тәрбиә эше алып барып, баланың эске күңеленә иғтибар ителмәһә, насар ғәҙәттең тамырланыуы бик тә ихтимал.

Баланың насар ғәҙәтен бөтөрөү маҡсаты ҡуйғанда уның ғәҙәтенә ҡаршы түгел, ә был ғәҙәтте барлыҡҡа килтергән сәбәпкә ҡаршы тәрбиә эше алып барырға кәрәк. Мәҫәлән, балала алдау ғәҙәте барлыҡҡа килде ти. Ни өсөн алдай ул? Уны үтә иркәләп, маҡтап, ҡупайтып ебәреүҙәнме? Уның һәр һүҙе һеҙҙә һоҡланыу тыуҙырыуҙанмы? Әллә уға иғтибар кәмеп, һеҙҙең иғтибарығыҙҙы йәлеп итергә тырышыуҙанмы? Улай булһа, баланың алдауына шик белдереп, ышанмағанлыҡты һиҙҙертеп ҡуйғыларға кәрәк.

Ә инде үтә ҡаты ҡуллы булыуҙан балала алдау ғәҙәте башланһа, мөнәсәбәтте йомшартырға, иплерәк булырға кәрәк.

Баланың насар ғәҙәтен бөтөрөүҙә ҡырҡа боролош яһарға ынтылырға ярамай. Ул саҡта тәрбиәләүсе кешегә ҡарата нәфрәт уяныуы ихтимал. Тәрбиәсенең тәрбиә ысулдары төрлө булырға тейеш. Ҡайһы саҡта баланың алдауына иғтибар итмәгән кеше булаһың. Ҡайһы саҡта алдағанын белгәнлегеңде һиҙҙереп, кире мөнәсәбәтеңде белгертә биреп ҡуяһың.

Насар ғәҙәтте бөтөрөү ысулдары файҙалы, ипле, аҡыллы булырға тейеш. Ә инде бөтөрөргә теләгән насар ғәҙәт, ысынлап та, насар ғәҙәт булырға тейеш - уныһы инде үҙенән-үҙе аңлашыла.

Был осраҡта тағы бер һорау килеп тыуа: тәрбиәсе балаға уның был ғәҙәтенең, ысынлап та, насар икәнлеген аңлатырға тейешме, әллә үҙе әйткәндәрҙең һис шикһеҙ үтәлешен генә талап итергәме?

Насар ғәҙәттәрҙең дә төрлөһө була. Балаға быны аңлатыу һәм үҙенең дә ул ғәҙәтте ташлауға ихтыярын егеү яҡшы, әммә ҡайһы бер ғәҙәттәрҙе ташлатыу өсөн ҡәтғи тыйыу ҙа кәрәк.

Ә инде насар ғәҙәтте ташлаған осраҡта - бүләкләү йәки, киреһенсә, ташламаған хәлдә яза биреү менән ҡурҡытыу бөтөнләй яңылыш алым.

Әммә ҡайһы бер осраҡта, мәҫәлән, эшкә ялҡауланыу, ығышлыҡ кеүек ғәҙәттәрҙе бөтөрөүҙә аҙыраҡ дәртләндереп ебәреү ҙә зыянға булмаҫ. Ошо юл менән унда хеҙмәт яратыу ғәҙәте тәрбиәләп була.

**(Дауамы бар).**

*ШАҢДАУ*

# ҺӘР ОЛО КЕШЕГӘ ТЕЛӘР ТЕЛӘК

**Гәзитебеҙҙең 46-сы һанында Фәрхәнә Исмәгилева "Ҡарттарҙың урыны пансионаттамы?" тигән һорау ҡуйып, бик үҙенсәлекле тема күтәрә. Ысынлап та, ҡартлыҡ ул шундай мәл: һин унда йәшәгән ғүмереңдең иң мөһим, иң яуаплы осорҙары емешен генә тирәһең. Ә кеше ғүмеренең иң яуаплы өлөшө - ул балалар үҫтергән, тәрбиәләгән, ошо тәрбиә емештәрен татыған мәл. Һәм был осорҙоң һөҙөмтәһе күп осраҡта һинең ошо хеҙмәткә күпме һөйөү, ҡай саҡлы иғтибар, ҡайһындай күңел йылыһы һалыуыңдан тора.**

...Бала саҡта медпункт, ҡоҙоҡ буйы, магазин кеүек ҡатын-ҡыҙҙар йыйыла торған урындарҙа йыш ҡына "ҡөйнәһен ҡарамаған" килендәрҙе шелтәләп телгә алыуҙарына шаһит булына ине. Олораҡ апайҙар былдай ҡатындарҙың битен йыртып, әрләп ташларға ла аптырамай ине. Хатта ҡатын-ҡыҙҙар ултырышы үткәреп йөрөгәндәрен, ололарын ҡарап еткермәгәндәрҙе уртаға ҡуйып фаш иткән осраҡтарын да хәтерләйем. Ауыл ерендә бит инде барыһы ла күҙәтеү аҫтында, түшәктә ятҡандарҙың инеп, хәлен белеп йөрөйҙәр, эскәмйәлә ҡыҙынып ултырған әбейһәбей янында туҡтап, һөйләшеп китәләр. Ололарын матур ҡарағандарҙы шулай уҡ халыҡ араһында маҡтайҙар. Үҙҙәренә лә шундай ҡартлыҡ теләйҙәр. Һәр хәлдә, ҡарттарҙың йәшәйеше хаҡында барыһы ла белә.

Ун туғыҙынсы быуатҡа тиклем япондарҙа "убосутэ" тигән ҡырағай йола йәшәй. "Ҡарттарҙан баш тартыу" тигәнде аңлата был һүҙ. Фәҡир ғаиләләр ололарын ҡарай алмай башлаһа, йәки бер ғаилә елкәһенә икешәр быуын (улар бит оҙаҡ йәшәгән) олатай-өләсәй булып китһә, ҡарттарҙы тау-урманға алып барып ҡалдыра алған. Һәм бөгөн дә уларҙа госпиталдәргә, дауаханаларға, пансионаттарға алып барылған атаәсәләрен "онотоу" ғәҙәти хәл икән... Әммә күп халыҡтарҙа ололарын бағып, сауап алып, мәңгелек донъяға оҙатыу алға ҡуйылған. Тажиктарҙа, төркмәндәрҙә, үзбәктәрҙә ҡарттар айырыуса хөрмәткә лайыҡ. Йыш ҡына фотоларҙа шул халыҡтарҙың ҡарт-ҡороһон йөкмәп алып йөрөгәндәрен аңғарырға була. Бәхтиһән, уларҙа ололарҙы кәрәк урындарына шулай арҡанда йөкмәп, ҡулдарында күтәреп алып барыу айырыуса сауаплы иҫәпләнә икән. Тағы ла ата-әсәнде үҙ ҡулдарыңдан ашатыу, уларҙың аяғын йыуыу, уларҙың үтенесен үтәү, ашағанда түргә ултыртыу һәм башҡалар иң өммәтле ғәҙәттәр булып килә икән. Ҡарттарын ҡарау өсөн балалары үҙ-ара ярыша ла икән. Әсәйҙең йә өләсәйҙең "был улым йә киленем менән йәшәргә теләмәйем" тип әйтеүе иң оятсылыҡтарҙың береһе, ти. Яңғыҙ ҡалған ололарҙы тәрбиәгә алыу ҙа берәүҙе лә аптыратмай уларҙа, күптәр былдай сауапты алып ҡалырға теләй икән. Яҡшы тәртип, күркәм ғәҙәттәр былар, һүҙ юҡ.

Өләсәй-олатайҙарҙың, ҡайны-ҡәйнәләрҙең бергә йәшәү һәм ғаиләнең тулы хоҡуҡлы ағзаһы булыу күренештәре әле мин бала саҡта ла бар һәм был ҡанун ине әле. Атайымдың әсәһе беҙҙең менән йәшәне. Балаларҙы ҡарау, йорт мәшәҡәттәре буйынса уның алдына сығып булмай ине. Үҙенең айырым урыны, айырым һандығы һәм тик ул ғына тотона торған нимәләрелер булды. Һәм өйҙә иң юғары хоҡуҡлы кеше лә өләсәйем булды шикелле. Үлем түшәгендә әсәйемә рәхмәт әйтеп ятҡанын һәм атайыма: "Килендән ҡала күрмә", - тигәнен яҡшы хәтерләйем.

Вафатында бар бала-саға, әсәйем зыулап илаштыҡ. Унан Силәбе өлкәһенән әсәйемдең әсәһен дә алып килеп ҡараныҡ. Ололар эштә саҡта ҡарт өләсәйемде ашатыу һәм эргәһендә һөйләшеп ултырыу бурысы беҙгә, балаларға йөкмәтелә ине. Үҙебеҙҙе ҡарап үҫтергән һәм өйрәнгән кешебеҙ булмағас, ул өләсәйебеҙ менән артыҡ һөйләшергә хәбәр ҙә булмағандыр инде, шуғалырмы, әсәйебеҙ уға ҡыҫҡырып китап уҡып ултырырға ҡуша ине. Һәр хәлдә, иғтибарһыҙ, бахыр булып, яңғыҙы бер бүлмәлә ятырға тейеш түгел ине. Шул мәлдәрҙә уның янына көн дә тиргәндәй күрше инәй инә һәм уны ла улы йә килене етәкләп алып килә, етәкләп алып ҡайтып китә, ауырһынмай ғына ынғайына йөрөйҙәр ине. Атай-әсәйебеҙҙең үҙ әсәләрен шулай ҡарағандарын күреп-белеп йәшәнек, улар үҙҙәре лә төп нигеҙҙә төпләнгән ағайым менән еңгәм ҡулында ҡараулы ятып, баҡыйлыҡҡа күстеләр. Быны уларҙың балағаһы күреп, ҡуша тәрбиәләшеп йөрөнө. Һәм киләсәктә улар ҙа атай-әсәйҙәренә шулай мәрхәмәтле булырҙар, тип уйлайым.

Үткәндә бер билдәле генә ағай хаҡында танышым: "Япа-яңғыҙ ята, улы ла, ейәндәре лә йөрөмәй янына", - тип һөйләп ултырғайны. Бик йәлләнем ағайҙы. Китаптарын уҡып үҫкәс, хөрмәт иткәс, әсенеп, ни өсөн улай булырға мөмкин икәнен белештем. Белгән кешеләр миңә заманында ағайҙың бәләкәс улын һәм ауырыу ҡатынын ташлап китеүен, аҙаҡ ҡына уларға кире ҡайтыуын бәйән итте. Эйе, был хәлде төрлө яҡтан анализларға ла, аҡларға ла, ғәфү итергә лә була. Әммә кешелек йәмғиәте, ғәҙәттә, иң ҡаты ҡанундарға нигеҙләнә лә ҡуя. Балалар нимә күреп үҫә - шуны башҡара. Нимә белә - шуны эшләй. Һөйөү һеңдергәндәре һөйөү булә, хыянат кисергәндәре хыянат итә, асыу алғандары асыуын төшөрә, битарафлыҡ күргәндәре иғтибарынан мәхрүм итеп ҡуя. Тимәк, был тәңгәлдә берәүҙе лә алдап та, яңылыштырып та булмай.

Шулай ҙа беҙҙең халыҡта ололарҙы ҡарау йолаһы һаҡланып килә әле. Таныштарым араһынан атай-әсәйен пансионатҡа тапшырғандарҙы йәки ҡарауһыҙ ҡалдырғандарҙы белмәйем. Киреһенсә, ярҙам итергә, улар эргәһенә ҡайта һалып килергә, кәрәк-ярағын хәстәрләргә ашҡынып торалар. Ололар менән бергә йәшәгән ғаиләләрҙә лә атай-әсәйҙәре түрҙә ултыра, ҡараулы. Сөнки улар үҙҙәре балаларын шулай матур, итәғәтле итеп тәрбиәләгән. Ниндәйҙер бер рекламала ла тапҡыр ғына итеп әйтелә бит: бөгөн балаға һалған көсөң һәм һөйөүең - ҡартлыҡ көндәге яҙмышың, тип. Дөрөҫ әйтелә. Кәрһеҙ ҡалғанда һине көнө-төнө аралашҡан хеҙмәттәштәрең дә, донъя күсәре кеүек булған етәксең дә, иң яҡын дуҫтарың да, бөтөн иғтибарыңды алған идеяларың да ҡарамаясаҡ, һин үҙең үк әүәләгән балаларың ҡулына ҡаласаҡһың.

**Шулай итеп, бала ҡорона ҡабаттан инеп, бер ҡатлы көнгә төшкән, ауырыған, хәтер юйылған, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән, алмашынған, түшәктә ятҡан мәлдә һәр кем кисерә башынан. Тимәк, беҙ ул мәлдә бөгөн үҙебеҙ ҡорабыҙ. Бер танышым балаһына йәне көйһә: "Ышаныс юҡ һиңә, ҡарттар йортонда ятылыр инде", - тип һүҙ ташларға ярата. Шул саҡта мин эстән генә әсәйемдең әйткәнен ҡабатлайым: "Эй, Аллам-мәүләм, балаларымды сауаплы итеп китергә яҙһын". Йәғни, улар ҡарамағында булып, улар ҡулынан оҙатылырға яҙһын, тигәнде аңлата булыр был. Һәр оло кешегә шуны теләйем.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# МӨМКИНЛЕГЕМ БАР...

## әммә "мөмкинселегем" юҡ

**Башҡорт телендә яңы һүҙҙәрҙең һүҙ яһаусы ялғауҙар ярҙамында барлыҡҡа килгәнен һәр ҡайһыбыҙ яҡшы белә. Тамыр һүҙгә ниндәйҙер ялғау ҡушылып яһалған һүҙҙең һәр осраҡта ла билдәле бер мәғәнәгә эйә булыуы ла бәхәсһеҙ. Һүҙ яһаусы ялғауҙар әҙмә-әҙлекле ҡушыла барып, бер тамыр һүҙ нигеҙендә тамырҙаш һүҙҙәр ояһы барлыҡҡа килә.**

Мәҫәлән, "хәйер" һүҙенән хәйерсе, хәйерселек, хәйерле, хәйерлек, хәйерһеҙ һүҙҙәре яһала. "Эс" тамырынан эске, эскесе, эскелек һүҙҙәре бар булған, әммә, ҡайһы берәүҙәр кеүек, "эскеселек" тип әйтеү һис дөрөҫ түгел. Эскеселек тип әйтер инек, әгәр эскесе һүҙе берәй йүнле һөнәрҙе аңлатһа, йә булмаһа, эскеселәрҙең берәй йәмғиәте булһа, ә был тузға яҙмаған нәмә.

Бөгөн ниндәй генә башҡорт баҫмаһын алып ҡарама, "мөмкинселек" тигән бер ғәрип һүҙ күҙгә ташлана. Ағай-эне радио-телевидениенан да тап шулай һөйләй хәҙер. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ошо һүҙҙе һүҙлектәрҙә лә осратырға була. Ә ул башҡорт теленең һүҙ яһалыш ҡанундарына тура киләме икән? Әйҙәгеҙ, тикшереп ҡарайыҡ. "Мөмкинселек" һүҙенең "мөмкин" тамырына "се" һәм "лек" ялғауҙары ҡушып яһалғанын күрәбеҙ. Тимәк, "мөмкин" һүҙенән тәүҙә "мөмкинсе" тигән тузға яҙмаған яңы һүҙ бар була, ә ундай һүҙ башҡорт телендә бер ҡасан да булмаған һәм булмаясаҡ. Телдә булмаған һүҙгә ялғау ҡушып, яңы һүҙ яһап буламы һуң? Юҡ, әлбиттә. Тап шуның өсөн дә телебеҙ беҙгә "мөмкинселек" тип һөйләр өсөн бер ниндәй ҙә мөмкинлек ҡалдырмай.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**Тарих фәндәре докторы, профессор Нияз Мәжитов үҙе тере саҡта Өфө ҡалаһының үҙәк өлөшөндәге ҙур археологик асыш тураһында бихисап хеҙмәттәр яҙҙы, мәғлүмәтте Башҡортостан һәм Рәсәй йәмәғәтселеге иғтибарына еткерә торҙо. Нияз Ғәбделхаҡ улы 2006-2007 йылдарҙа Пушкин урамының түбәнге кварталдарында урынлашҡан Өфө-II ҡаласығында алып барылған археологик ҡаҙыу эштәре һөҙөмтәһендә табылған ҙур ултыраҡ ҡалдыҡтарын (ҡәлғә стенаһы, торлаҡ урындары, тимер иретеү мейестәре, ювелир оҫтаханаһы, бик күп табыштар, шул иҫәптән XIV быуат аҡсалары) тикшертеү өсөн ваҡытында Мәскәүҙән һәм Ҡаҙандан юғары квалификациялы белгестәрҙән торған ирекле эксперттар төркөмө саҡырыуға өлгәште. Улар археологик ҡаҙылма материалдары менән ентекләп танышҡас, был ҡаласыҡтың V быуаттан алып XVI быуат баштарына тиклем өҙлөкһөҙ кеше йәшәгән ҙур ултыраҡ (ҡала) цитаделе (кремле) булыуы тураһында һығымта яһаны. Нияз Мәжитовтың гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был материалы Өфө-II ҡаласығы тарихы һәм башҡа башҡорт ҡалалары тураһында.**



# КҮПТӘН БИЛДӘЛЕ ХӘҠИҠӘТ,

## йәғни IX-X быуаттарҙағы башҡорт ҡалалары тураһында

Коновалованың Анхадара йылғаһын Ашҡаҙар йылғаһы тип ҡарау теләге ҡыҙыҡлы: Ағиҙел йылғаһының һул ҡушылдығы булған ошо йылға буйында Ҡаруҡийа ҡалаһы урынлашҡан була. Ошо тап килеү хәҙерге Стәрлетамаҡ ҡалаһы янында, Ашҡаҙар тамағында Ҡаруҡийа ҡалаһы ҡалдыҡтарын эҙләп табыуға өмөт уята. Стәрлетамаҡ ҡалаһы янында урта быуаттарҙың тәү осорона ҡараған археологик ҡомартҡылар комплексы булып, унда IX-X быуаттарға ҡараған бик бай Стәрлетамаҡ ҡәберлеге инеүен иҫәпкә алһаҡ, ошо фараздың ысынбарлыҡҡа тап килеү ихтималлығы ҙурая.

Әл Иҙрисиҙең хеҙмәтен тикшереүсе Көньяҡ Уралда тағы ла бер ҙур булмаған сәскә атыусы ҡала - Нәмджан ҡаласығы булыуын билдәләй: "Уның менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә. Был ҡала Суҡан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда меңдән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм (Хорезм. - Авт.) еренә, Шаш (Һырдаръя йылғаһының уң ҡушылдығы. - **Авт.**) иленә һәм гуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр (ҡондоҙ. - **Авт.**) тигән йәнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, .... юғары хаҡҡа һатыла... Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп".

Коновалова фекеренсә, Нәмджан ҡалаһы баҡыр рудниктары күп булған Миәс, йәиһә Орск ҡалалары районында урынлашып, Суҡан йылғаһы Яйыҡ йылғаһы менән тап килеүе мөмкин. Артабан сығанаҡта тағы ла ошолар хәбәр ителә: "Нәмджан ҡалаһы кешеләре... (үҙҙәренең тауарҙарын. - **Авт.**) караптарға тейәп, Хазар диңгеҙенә алып төшәләр, яр буйлап Исил ҡалаһына (Волганың түбәнге яғындағы Хазар ҡалаһы. - **Авт.**) һәм башҡа урындарға тиклем барып етеп, һатыу итәләр, йәиһә үҙҙәре теләгәнсә тотоналар". Китапта Көньяҡ Уралдан Урта Азияға алып барыусы каруан юлдары һәм Яйыҡ йылғаһы буйлап һыу юлы аныҡ һүрәтләнгән.

Тағы ла бер башҡорт ҡалаһы Гүрхан Нәмджан ҡалаһынан һигеҙ күсем алыҫлыҡта була. "Был Аскутийа (Скифия. - **Авт.**) ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы, - тип бәйән ителә сығанаҡта. - Ул Табаристан (Каспий. - **Авт.**) диңгеҙенә ҡойған Исил йылғаһынан төньяҡ тарафта урынлашҡан. Ҡала яҡшы төҙөкләндерелгән, тирә-яғы эшкәртелгән, бында ҡайһы саҡта күрһәтелгән йылға буйлап, сауҙагәрҙәр һәм сәйәхәтселәр килеп йөрөй. Бында Аскутийа төркиҙәре хакимы йәшәй, уның ҡарамағында күп һанлы яугирҙар, ҡорамал һәм ҡоралдар, күп ҡәлғәләр, эшкәртелгән ерҙәр бар. Был илдә һөнәрселек тауарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған эйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - бындайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй".

Бындай ентекле һүрәтләү комментарий талап итмәй. Гүрхандың башҡорт илендә эре сәйәси һәм мәҙәни ҡала булып, сауҙа һәм һөнәрселек үҙәге булғанлығын күрәбеҙ. Гүр (ҡәбер, кәшәнә) һәм хан (хаким) һүҙҙәре ҡушылыуынан килеп сыҡ-ҡан ҡала атамаһы үҙе иғтибарҙы йәлеп итеп тора. Күрәһең, ҡаланың барлыҡҡа килеүе менән туранан-тура бәйле булған арҙаҡлы хан ошонда ер-ләнеп, ҡала исеменә нигеҙ булған.

Әл Иҙриси һүрәтләгән икенсе бер башҡорт ҡалалары Мастр һәм Ҡастр әле иҫкә алынғандары менән сағыштырғанда бәләкәйерәк булған. "Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүсе бөтә сит ил кешеләрен үлтереп тора. Был ике ҡала Исилгә ҡойған йылға буйында урынлашҡан", тип яҙа ул.

IX-X быуаттарҙағы башҡорт ҡалалары әле һанап үтелгәндәре менән генә сикләнмәй, тип уйларға кәрәк. Бөтә Көньяҡ Уралда I-II мең йыллыҡтар сигенә ҡараған мәҙәни ҡалдыҡтары булған 100-гә яҡын ҡаласыҡ табылыуы ошо хаҡта фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә, әммә улар тейешенсә өйрәнелмәгән әле. Күрһәтелгән яҙма сығанаҡтағы мәғлүмәттәр, Өфө-II ҡаласығындағы археологик асыштар киләсәктә шартлы рәүештә "ҡаласыҡ" тип атап йөрөтөлгән яңы ҡалалар табыласағына өмөт уята. Уларҙы эҙләп табыу һәм ғилми тикшереү өсөн маҡсатлы ялан эштәрен ойоштороу зарур.

Нәмджан һәм Гүрхан ҡалалары менән идара итеүсе хакимдарға власть атанан улға тапшырылыу юлы менән бирелеүенә уҡыусы иғтибар иткәндер, моғайын. Был башҡорттарҙа үҙҙәренең дәүләт менән идара итеү системаһы булыуын иҫбатлаусы беренсе һәм асыҡ дәлил ул. Текстарҙа Ҡаруҡийа, Мастр һәм Ҡастр ҡалаларында ошо хаҡта башҡа мәғлүмәт булмаһа ла, улар менән идара итеү ошолай уҡ урындағы хакимдар - хандар тарафынан башҡарылған, тип уйларға кәрәк.

Ҡалалар бер-береһенән байтаҡ алыҫ арала урынлашҡан, шуның өсөн улар локаль ханлыҡтарҙың сәйәси үҙәктәре булғанға оҡшай. Бер үк ваҡытта башында йоғонтоло хандар торған дөйөм этник дәүләт булыуы раҫтыр. Ошондай башҡорт хандарының береһенең исеме фәнгә билдәле. Әл Иҙриси кеүек үк, IX-X быуат авторҙарының (Джәйхани, ибн Хордадбәк һ.б.) хеҙмәттәрен ҡулланған XI быуат авторы Гардизи мәғлүмәтенә ярашлы, уның исеме Басджурт (Башҡорт) булған. Сығанаҡта әйтелеүенсә, Басджурт хазар ҡағаны тарафынан хазарҙар (Төньяҡ Кавказ, Түбәнге Волга буйы) һәм Көньяҡ Урал далаларында йәшәүсе ҡырғыҙҙар араһындағы аңлашылмаусанлыҡты юлға һалыу маҡсатында саҡырып алынған була. Басджурт үҙенә тапшырылған миссияны бик оҫта башҡарып сыға. Ошондай дәүләт-ара ҡатмарлы дипломатик мәсьәләләрҙе хәл итеү дәрәжәһеҙ чиновникҡа тапшырылмай, тимәк, беҙ Басджурттың (Башҡорттоң) башҡорт ханы булыуы тураһында һығымта яһарға хаҡлыбыҙ.

**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ОНОТОЛҒАН ҠӘҮЕМ

## Ҡатлы-ҡатлы икән был донъя...

Боронғо төркиҙәрҙең донъяға ҡараштарында тарлауыҡ, артылыш, инеш, йылға, мәмерйә кеүек тигеҙ ер өҫтөндә айырымланып торған урындарға иғтибар ителә: бындай ерҙәрҙә донъялар яҡынлашып, улар араһында алыш-биреш итеү бара. Тыуҙырылған донъяға тәртип, яҡтылыҡ, йылылыҡ, тауыш хас булып, былар тормош күренештәрен һүрәтләй. Был кеше өсөн яратылған донъя. Кешеләр йәшәгән донъя - күҙгә күренеп торған, ҡояшлы, тере донъя. Боронғо ҡомартҡыларҙың береһендә бына нисек яҙылған: "Мин зәңгәр күктәге ҡояшты һәм айҙы күрмәйем инде, ҡайғырып, һеҙҙән һәм еремдән айырылдым". Ер, күк, ҡояш, ай, йондоҙҙар һәм йондоҙлоҡтар, тәбиғәт стихияһы күренештәре уларҙың тәбиғи фантазияларында йәнле заттар рәүешендә күҙаллана. Шулай итеп, төркиҙәр инаныуынса, Йыһан айырым донъяларҙан, донъя тарафтарынан, күк ҡаттарынан тороп, уны танып белеү мөмкинлеге булған.

Йыһандың өс зонаһының, йәғни күк, ер һәм ер аҫты донъяларының күҙгә күренгән өлөшөнән башҡа, күренмәгәне лә була. Күренмәй торған күк донъяһы ҡатлы бәлеш кеүек, өс ҡатламдан, йәки ярустан тора. Һәр ҡатлам ниндәйҙер илаһтың һәм әруахтарҙың төйәге булып, иң һуңғыһында Күктең бөйөк рухы - Тәңре йәшәй, тип иҫәпләнгән. Боронғо төркиҙәр күктә йәшәүсе рухи заттарҙы ат менеп йөрөй, тип уйлап, улар өсөн ҡорбанға ат сала торған булған. Юғары донъя илаһтарының аттары булһа, түбәнерәк ҡатламдағылары өсөн үгеҙ тәғәйенләнгән. "Күктә тыуған" тип һаналған ҡағандар һәм принцтар асыҡ (аҡ) төҫтәге аттарҙа йөрөгән. Күл-тегин хөрмәтенә ҡалдырылған яҙмала уның аттарының төҫө ун тапҡыр иҫкә алына. Ҡайһы бер ҡамдар күҙгә күренмәҫ күк донъяһын "күк ере" тип тә атаған. Бында илаһ һәм башҡа рухтар менән бер рәттән, әҙәми заттар ҙа көн итә, тип иҫәпләнгән. "Күк кешеләре" ерҙәгеләрҙән кейемдәрен ҡултыҡ аҫтынан быуып йөрөүҙәре менән айырылып торған.

Ерҙән көмбәҙләнеп күренгән күк йөҙө "күк ҡуйыны" йәки "яҡын күк" тип йөрөтөлгән. Донъяның был тарафында ҡояш һәм ай, йондоҙҙар һәм йәйғор урын алған. Тап ошонда, болоттар араһында, күк көстәре тарафынан күк күкрәтелгән, йәшен йәшнәтелгән, ямғырҙар, боҙ һәм ҡар тыуҙырылған. Күк ҡырыйы горизонтта ер менән бер тоташып, бер ысҡынып торған; бәүелеп торған күк көмбәҙен төркиҙәр матди есем рәүешендә күҙ алдына килтергән. Ҡыштарын күк көмбәҙе туңып, ҡамдарҙың бик һирәге генә уның аша үтеп сыға ала, тип иҫәпләнгән.

Урта донъяның да күренгән һәм күренмәгән өлөштәре була. Урта донъяның күренмәгән яғы (ул теге донъя тип тә аталған) күҙгә күренмәҫ заттар - тау, урман, һыу, инеш һ.б. нәмәләрҙең хужалары йәшәгән урын булып, улар яҡты донъя менән идара итеүселәр рәүешендә ҡабул ителгән. Төркиҙәрҙә хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалған эзи, хужа, эйә һүҙҙәре ошо хаҡта һөйләй. Рух-эйәләрҙең даими йәшәгән урыны - кеше һәм тәбиғәт донъяларының сигендә булып, кешенең ошо сиктәрҙе үтеүе уның хужалыҡ итеү эшмәкәрлеге арҡаһында килеп сыға. Кешеләр ҡайҙа йәшәй һәм эшләй, рух-эйәләр ҙә шул ерҙә көн итә. Әммә тәбиғәт объекттарының эйәләре теге донъя вәкилдәре булып ҡала. Ошо ҡараштарҙы өйрәнгән ғалимдар төркиҙәрҙең тәбиғәт донъяһы эйәләрен үҙҙәренең партнерҙары рәүешендә ҡабул итеп, уларҙы туғандары, хатта боронғо ата-бабалары сифатында хөрмәтләүҙәре тураһында яҙа.

Боронғо төркиҙәр ҡәҙимге тормошта бигерәк тә тау һәм һыу эйәләренә ҡарата иғтибарлы булған. Был заттарҙың эшмәкәрлеге йәй көндәре бик әүҙем булып, ҡыш тынып тора икән: улар үҙҙәренең оя-мәмерйәләрендә яҙға тиклем ойоп, йоҡлап ята, тип һаналған. Тау, урман һәм һыу эйәләре хөрмәтенә һалынған дөйөм ҡорбан өс мәртәбә күберәк булып, кешеләрҙең улар менән булған "мөнәсәбәттәре"нең яҡынайыуы-йыраҡайыуына ҡарап көйләнгән. Төркиҙәр башҡа нәмәләрҙең дә эйәләре булыуына ышанһалар ҙа, үҙҙәре өсөн иң әһәмиәтлеһе сифатында тау һәм һыу эйәләре менән яҡынлашыуҙы хуп күргән. Төркиҙәр тирә-яҡ донъяның улар менән уртаҡ булып, хужалыҡ эшмәкәрлеге именлеген ошо заттарҙың үҙҙәренә яҡшы мөнәсәбәттә булыу-булмауы менән аңлатҡан.

**Рафаэль БӘҘӘРТИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

# КИЛӘСӘКТӘ Хоҙай үҙе

**Мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичтың "Башҡортостан" шиғырында шундай юлдар бар:**

**Уралҡайҙың аҫты алтын,**
**Өҫтө шиғыр, үҙе нур;**
**Киләсәктә был ергә**
**Хоҙай үҙе ҡыҙығыр;**

**Фирҙәүестәр төҙәләр,**
**Әлуап ниғмәт теҙелер;**
**Күкте ташлап мәләктәр,**
**Был ерҙәрҙә гиҙенер...**

**Ысынлап та, Бабичтың әйткән шул көндәре килдеме икән, еребеҙгә Хоҙай ғына түгел, барыһы ла ҡыҙыға, һәр кем ынтыла. Һәр кем килә. Ярай әле, еребеҙҙең аҫты һәм өҫтө бай булыуы беҙгә бәрәкәт булып әйләнеп ҡайтһа. Мәҫәлән, Күмертау ҡалаһының йә булмаһа Хәйбулла районының Бүребай ауылы янында ян-яҡҡа ағыуын бөркөп ятҡан һыу яткылығын күҙ алдына килтерәһең, бының киреһен аңларға мәжбүр булаһың. Байлыҡтарыбыҙ күпләп ситкә ағылып, беҙгә эсергә яраҡһыҙ һыуҙар, зарарлы газдар, радиация ғына тороп ҡала һымаҡ. Ошо һәм башҡа проблемалар, ғөмүмән, ер аҫты файҙалы ҡаҙылма байлыҡтары хаҡында күренекле дәүләт эшмәкәре, тау геологы, Рәсәй ер аҫты байлыҡтарын разведкалау отличнигы, Урал тау премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған металлургы Рәсих Әғзәм улы ХӘМИТОВ менән әңгәмә ҡорабыҙ.**

**Рәсих Әғзәм улы, Бабичтың юғарылағы шиғырын уҡыған саҡта, бер яҡтан, ғорурлыҡ тойғоһо кисерәһең дә, икенсе яҡтан, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтарыбыҙға бәйле хәҙерге ысынбарлыҡҡа, хәҡиҡәткә тура ҡараһаң, был шатлыҡ оҙаҡҡа һуҙылмай. Был йәһәттән ни әйтерһегеҙ?**

- Беҙ Рәсәйҙең ҡап уртаһында ултырабыҙ. Атай-олатайҙарыбыҙ сикһеҙ далаларҙы ҡалдыра-ҡалдыра ошо ерҙә төйәкләгән. Беренсенән, Урал тауҙары сит-яттарҙан һаҡланыу өсөн ҡалҡан ролен үтәгән, икенсенән, атай-олатайҙарыбыҙ ошо ерҙең ер өҫтө һәм ер аҫты байлыҡтарына сикһеҙ бай булыуын белгән. Белеп кенә ҡалмаған, эшкәрткән дә. Мәғдәнселек башҡорттарҙа борон-борондан киң үҫешкән. Баймаҡ районының Күсей ауылы янындағы шторндар һәм шурфтар бынан ҡырҡ мең йыл элек был сәнәғәттең үҫешкәнлеге хаҡында һөйләй. Тимәк, беҙҙең халыҡ йәйләүҙән-йәйләүгә күсеп, көтөү генә әйҙәп йөрөмәгән. Йә булмаһа, Арҡайым, Һынташ, Улаҡ территорияларын алайыҡ. Уларҙа бынан ике-өс мең йыл элеккe мәғдәнселек сәнәғәте эҙҙәре һаҡлана. Ырымбур өлкәһендә Ташҡаҙған тигән урын бар, уның атамаһынан уҡ нимәгә бәйле булыуы күренеп тора. Рәсәй батшалығы, һуңынан совет осоронда был ерҙәрҙә сәнәғәт кимәлендә руда табыу һәм эшкәртеү башланып китә, улар барыһы ла беҙҙең атай-олатайҙарҙың тәжрибәһе нигеҙендә барлыҡҡа килә. Быны иҫбатламаһы - мәғдәнсе Исмәғил Тасимов эшмәкәрлеге. Америкалағы "Азатлыҡ" статуяһының башҡорт баҡырынан эшләнеүе генә лә күпкә ишара. Йә булмаһа, Парижлағы, Европалағы күп кенә һарайҙарҙың биҙәлешендә Ирәндек буйында табылған йәшмәләр ҡулланыуын алайыҡ.

Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ағас киҫкән ерҙә юнысҡы ҡала. Быуаттар буйына, һуңынан Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында руда эшкәртеү өсөн күпме урмандар киҫелеп, ҡола яландар хасил булған, соҡор-саҡырҙар, ағыулы һыуҙар ҡалған. Әгәр ҙә Башҡортостандың шундай файҙалы ҡаҙылмалары, ер өҫтө байлыҡтары, урман-тауҙары булмаһа, ҡыҙыҡһыусылар ҙа әҙ булыр ине. Тағы ла халҡыбыҙ үҙ ерендә табылған байлыҡтың ундан бер өлөшөн үҙенә файҙа итеп алдымы икән, тип тә уйлайым.



***Әгәр ҙә Башҡортостандың шундай файҙалы ҡаҙылмалары, ер өҫтө байлыҡтары, урман-тауҙары булмаһа, ҡыҙыҡһыусылар ҙа әҙ булыр ине. Тағы ла халҡыбыҙ үҙ ерендә табылған байлыҡтың ундан бер өлөшөн үҙенә файҙа итеп алдымы икән, тип тә уйлайым. Нефть табыу өлкәһен генә алайыҡ. Әгәр ҙә нефтебеҙ булмаһа, ҙур ҡалалар һалынмаҫ, юғары уҡыу йорттары төҙөлмәҫ ине. Нефть беҙҙең профессиональ аңды үҫтерҙе. Әммә Конституцияларҙа яҙылғанса, файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарҙың урындағы халыҡтың мәнфәғәтендә файҙаланмауына бер нисек тә күҙ йомоп ҡарай алмайбыҙ барыбер ҙә. Аҡсаның булмауы вәкәләтлектәрҙең дөрөҫ бүленмәүенән килә. Ә инде ташландыҡ карьерҙарҙан килеп тыуған экологик проблемалар ошоларҙың күңелһеҙ һөҙөмтәһе генә.***

Нефть табыу өлкәһен генә алайыҡ. Әгәр ҙә нефтебеҙ булмаһа, ҙур ҡалалар һалынмаҫ, юғары уҡыу йорттары төҙөлмәҫ ине. Нефть беҙҙең профессиональ аңды үҫтерҙе. Әммә Конституцияларҙа яҙылғанса, файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарҙың урындағы халыҡтың мәнфәғәтендә файҙаланмауына бер нисек тә күҙ йомоп ҡарай алмайбыҙ барыбер ҙә. Аҡсаның булмауы вәкәләтлектәрҙең дөрөҫ бүленмәүенән килә. Ә инде ташландыҡ карьерҙарҙан килеп тыуған экологик проблемалар ошоларҙың күңелһеҙ һөҙөмтәһе генә. Был хәлдә, әлбиттә, үҙгәртергә кәрәк, сөнки артабан был рәүешле дауам итергә тейеш түгел. Урындағы закон сығарыусылар, Федераль үҙәк менән бергәләшеп, закондарҙы һәм норматив хоҡуҡ документтарын үҙгәртергә бурыслы. Бөгөн барлыҡ вәкәләтлектәр ҙә Рәсәй кимәленә күсерелгән. Икенсе ҙур мәсьәлә - кадрҙар әҙерләү, сөнки геологтар һәм тау инженерҙары хәҙер бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

**Хәҙерге ваҡытта республикабыҙҙың файҙалы ҡаҙылмалары күпме ҡалған һәм уларҙың запасы оҙаҡҡа етерлекме?**

- Геологик яҡтан ҡарағанда, беҙҙең республика һымаҡ төбәктәр Рәсәйҙә бер нисә урында ғына. Әйтәйек, Красноярск крайы, Иркутск өлкәһе. Башҡортостанда файҙалы ҡаҙылмаларҙың барыһы ла бар. Һуңғы 100-150 йыл эсендә Башҡортостандың ер аҫтында ниндәй ҡаҙылма байлыҡтар ятҡанлығы ныҡлап өйрәнелгән. 1995 йылда беҙҙең европроба тип аталған ер аҫты ҡатламдары тикшерелде. Ул саҡта ер аҫтыбыҙҙың 16 километрға тиклем төҙөлөшөн ентекле өйрәндек. Шулай уҡ полеозой яткылығының, кристаллик фундаменттың киҫкен аҫҡа төшөү сәбәптәрен тикшерҙек. Фараздарыбыҙ буйынса, биш-ете километр тәрәнлектә нефть, руда яткылыҡтары булыуы мөмкин. Уларҙы разведкалау, быраулау өсөн ҙур сығымдар талап ителә. Бер осорҙа Әстерхан өлкәһендә алты-ете километр тәрәнлектә газ ятҡылығы табылды. Беҙҙә лә ундай мөмкинлектәр бар. Ырымбур өлкәһенә сиктәш Күгәрсен, Көйөргәҙе райондарында бар ундай урындар. Уларҙағы запастарҙың күпмелеге әле билдәләнмәгән. Нефттең разведкаланған запастары 20-25 йылға етерлек. Әммә геология-разведкалау эштәре тейешенсә алып барылмауы арҡаһында запастарҙың күпмегә тулыланыуын әлегә белә алмайбыҙ. Бөгөн республика йылына 16-17 миллион тонна нефть сығара икән, уларҙың запастарын йылына 3-4 миллионға ғына тулыландырабыҙ. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, беҙ совет дәүерендәге запастар иҫәбенә генә йәшәйбеҙ. Әгәр ҙә баррелдең хаҡы 30 долларға ҡала икән, рентабелле табылған яткылыҡтарҙың күләме кәмергә мөмкин. Бөгөн иһә ил күләмендә әһәмиәт Алыҫ Көнсығышҡа, Яҡутстанға һәм Арктика бассейнына бирелә. Уларҙағы газ, нефть ятҡылыҡтары яңы технологиялар буйынса сығарыу ҡулайлы.

Беҙҙә иһә газ, нефть ятҡылыҡтарын тулыландырыуға Хөкүмәт тарафынан бер тин дә бүленмәй. Баҡыр рудаһы запасы Хәйбулла, Учалы, Баймаҡ райондарында тупланған. Был тармаҡта меңдәрсә-меңдәрсә кешеләр хеҙмәт итә, ҡаҙнаға аҡсаһы ла килеп тора. Дөрөҫөн әйткәндә, табыш дөрөҫ бүленмәй. Мәҫәлән, руда табыуҙан килгән табыштың 40 проценты үҙебеҙҙә ҡала, 60 проценты Рәсәй ҡаҙнаһына китә. Нефть сығарыуҙан килгән табыштың 10 проценттан да аҙырағы беҙҙә ҡала, 90 проценты Үҙәккә китә. Йөҙләү таштарын һатыуҙың да өлөшө аҙ ғына.

**Һеҙ нефть запастарының тулыланыуы хаҡында әйттегеҙ. Ул ниндәй иҫәпкә һәм ни рәүешле тулылана һуң? Тағы ла бер фекерҙе ишетергә тура килә: ул да булһа, ҡара алтынды ер аҫтынан сығҡас, сеймал көйө сит илгә һатыу, йәнәһе, файҙалыраҡ. Ә инде уны нефть эшкәртеү заводында эшкәртеп һатыуға сығарһаң, үҙкиммәте бер нисә тапҡырға күтәрелә, был осраҡта рентабеллек юҡҡа сыға. Был дөрөҫмө?**

- Донъя иҡтисадының үҫешен хәҙерге ваҡытта Ҡытай, Һиндостан, Бразилия кеүек илдәр билдәләй. Сөнки был дәүләттәрҙә халыҡ күп йәшәй, йәғни уларҙың тукланыу, кейенеү, хәрәкәт итеү, шулай уҡ тормоштарының башҡа шарттарын тәьмин итеү ихтыяжы юғары. Тап шуның өсөн донъяның алға ынтылышы ошо дәүләттәргә бәйле. Беҙ килешеү буйынса Ҡытайға 80 миллион тонна нефть сығарырға тейешбеҙ, әйткәндәй, сеймал көйө. Миненсә, киләсәктә Ҡытайҙың сик буйында нефть эшкәртеү заводтары төҙөп, шулар аша сығарыу файҙалыраҡ булыр ине. Донъя сәнәғәтендә сеймал сығарыу тигән күренеш күптән онотолған.

***✓ Бөтә кимәлдәге закондар ҙа яҙылған. Ниңә ул закондар үтәлмәй һуң? Беренсенән, урындарҙа кадрҙар етешмәй, икенсенән, иң өҫтә ултырыусы етәкселектең ихтыяры кәрәк.***

# БЫЛ ЕРГӘ

## ҡыҙығыр…

Нефть запастарын тулыландырыуға килгәндә, бында разведкалау, яңы ятҡылыҡтар табыу, ресурстарҙы прогнозлау хаҡында һүҙ бара. Быраулауҙың бер нисә ысулы бар. Әйтәйек, горизонталь, вертикаль һәм тәрәнлеккә быраулау.

**Бер тапҡыр һурып алынған нефттең урынына тағы нефть йыйылмаймы ни, ул тәбиғи рәүештә тулыланмаймы?**

- Татарстанда иң ҙур ятҡылыҡтарҙың береһенән, фаразланған буйынса, бер нисә миллиард тонна нефть һурып алынған. Бөгөн килеп тикшереп ҡарағалар, шул урында тағы ла шунсама нефть запасы барлыҡҡа килгән. Ғалимдарҙың фаразлауынса, уларҙа ерҙең төпкөлөндә ҡалған нефть үҙенән-үҙе килеп сыҡҡан булырға тейеш. Был - органик булмаған теория. Ә органик теорияға килгәндә, 500 миллион йылдар элек ул ерҙә диңгеҙ булған. Бер заман диңгеҙ кибеп, ундағы органик матдәләр ҡатлам булып ултырып, аҙаҡ нефтькә әүерелгән. Ике теория ла ысынбарлыҡҡа тура килә.

**Яңыраҡ тағы ла бер теория хаҡында "Наука" каналында һөйләнеләр. Ғаләмдә секундына меңәрләгән планеталар, йондоҙҙар шартлап юҡҡа сығып, тағы ла шунсамаһы барлыҡҡа килеп тора икән. Уларҙың сандары ер өҫтөнә ултырып, аҙаҡ ер аҫтына төшөп, нефтькә әүерелә икән. Бында нигеҙ бармы?**

- "Планетар геология" тигән төшөнсә бар. Башҡа планеталарҙан ер өҫтөнә кометалар, астероидтар килеп төшөп, катаклизмдар күҙәтелеүен инҡар итеп булмай. Ҡайһы бер алмаз ятҡылыҡтарының барлыҡҡа килеүен юғары температура һәм баҫымға бәйләп аңлаталар. Ер аҫтынан сыҡҡан углеводород йыһандан комета ҡапыл килеп төшөп, ер менән бәрелешеү һөҙөмтәһендә графит йә алмаз рәүешен ала икән. Ер аҫтынан магмаларҙың урғылып сығыуы ла ошо сәбәпкә бәйле. Ундай процестар һаман да дауам итә. Мәҫәлән, Хәйбулла, Баймаҡ райондарында миллиард йылдар элек руда ятҡылыҡтары барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе булған процестар бөгөн Тымыҡ океан төбөндә дауам итә. Тимәк, киләсәктә унда бик күп файҙалы ҡаҙылмалар табыу мөмкин буласаҡ.

**Шул уҡ "Наука" каналында тағы ла бер химик элемент хаҡында һөйләнеләр. Ниндәйҙер бер планетала сәй ҡалағына ғына һыйырлыҡ химик элемент тапҡандар. Уға туплаған энергия ерҙәге барлыҡ машиналарҙы, завод-фабрикаларҙы эшләтеү, яҡтыртыу, йылытыу һ.б. өсөн йөҙ йылға етерлек. Хәҙерге ваҡытта ғалимдар ул есемдәге энергияны нисек итеп файҙаланыу проблемаһы өҫтөндә баш вата. Был мөмкинме?**

- Мөмкин. Мәҫәлән, әгәр ҙә беҙ Айҙағы гелий тигән водородтың бер төрө булған есемде ҡулланһаҡ, 10 тонна гелий Ер шарын йылытыу өсөн бер йылға етәсәк. Айҙа был элемент бик күп. Гелий шулай уҡ нефть ҡатламдарында ла бар.

**Башҡортостанда алтындың запасы күпмерәк ҡалған тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Алтынды сәнәғәт кимәлендә табыу һәм эшкәртеү баҡыр, көмөш рудаларын эшкәртеүгә тотонған саҡтан башлана. Һибелмә алтын запастары Учалы, Баймаҡ райондарында табыла, приискылар, заводтар төҙөлә. Бындай запастар бөттө тиерлек, шуға күрә хәҙерге заманда башҡа рудаларҙағы алтынды эшкәртеү менән мәшғүлбеҙ. Бындай запастар тағы ла 50 йылдан 100 йылғаса етеүе мөмкин.

**Ни өсөн беҙҙең халыҡта "алтын бәхет килтермәй" тип әйткәндәр икән?**

- Шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙ алтынға ҡарағанда көмөштө яҡынраҡ күрә. Ни өсөн тигәндә, көмөш күберәк таралған, унан төрлө биҙәүестәр, нағыштар эшләйҙәр.

**Бәлки, алтындың бик аҙ булыуы, аҡса эквиваленты булып йөрөүе лә бында роль уйнағандыр. Нимә генә тимә, алтын - нәфсе сығанағы, уны ҡулына төшөрөү өсөн кеше иман, әхлаҡ мәсьәләләрен дә онота, намыҫы аша атлай. Бәлки, ошо сәбәптәр ҙә барҙыр?**

- Килешәм, ул яғы ла бар. Ни өсөн тигәндә, алтын халыҡтар, ырыуҙар араһында ҙур-ҙур һуғыштар башланыуға сәбәпсе булған.

**Уралдың был яғындағы нефтте һурып бөтөрөп баралар, ә уның теге яғында - Өфө яғынан ҡарағанда - арьяғында нефть бармы икән? Тикшереүҙәр үткәрелгәнме?**

- 2000 йылда геология хеҙмәте заказдары буйынса "Башнефтегеофизика" йәмғиәте аша мин Башҡортостанды арҡырыһына-буйына, шул иҫәптән Баймаҡ, Хәйбулла райондарында тикшеренеү үткәрҙем. Беҙҙең база Күлтабан күле янында урынлашты. Төрлө ысулдар, шул иҫәптән аэрокосмик юл менән дә өйрәндек. Беҙҙең самолеттар аҫтан ғына осоп йөрөнө, уларға беркетелгән аппаратуралар менән тикшереү үткәрҙек. Бынан тыш, тикшеренеү эшендә сейсмопартиялар ҙа ҡатнашты. Улар төрлө вибраторҙар ярҙамында барлыҡ территорияны тикшереп сыҡты. Шулай уҡ "Башкиргеология" йәмғиәте скважиналар быраулаНы. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә Силәбе менән Ҡыҙыл араһында карбо ҡатламын таптыҡ. Ул ҡатламдың аҫтында, 5-6 километр тәрәнлектә, нефть, газ ятҡылыҡтары булырға тейеш, тип фараз иттек. Шул урында быраулау эштәре үткәрергә тейеш инек. Бер скважинаны быраулау өсөн генә кәмендә шул ваҡыттағы иҫәп менән 700-800 миллион һум аҡса кәрәк ине. Әммә шул саҡ донъялар буталып китте. Беҙҙе экология министрлығы менән бергә ҡушып, программабыҙ аҙаҡҡаса үтәлмәй ҡалды.

Үҙебеҙҙең тыуған яҡҡа, Баймаҡ районына әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Беҙ ауылдан Аҡташ, Шүлкә яғына бесәнгә йөрөйбөҙ бит инде. Шул яҡта, иҫләһәң, "Дегет" тигән урын бар. Ул урынды атай-олатайҙарыбыҙ юҡҡа ғына дегет тимәгән бит. Был урындың атамаһы шул ерҙә йылғанан урғылып ятҡан майға бәйле килеп сыҡҡан.

Хәҙерге ваҡытта Йылайыр районында ҙур-ҙур газ ятҡылыҡтары табылыуы мәғлүм булды. Әле унда лицензия нигеҙендә эштәр дауам итә. Шулай уҡ Матрай, Юлдыбай, Подольск, Күлтабан тирәһендә газ һәм нефть ятҡылыҡтары булырға тейеш. Әлбиттә, был запастар киләһе быуындар өсөн.

**Ирәндектә ниндәй файҙалы ҡаҙылмалар барлығы билдәле?**

- Унда Менделеев таблицаһындағы бөтә элементтар бар, әммә уларҙың миҡдары аҙ. Бында һибелмә алтын да табырға була. Ирәндектең иң ҙур байлығы - йәшмә, йөҙләү таштары. Был тауҙың беҙҙең өсөн иң ҙур әһәмиәте - урмандары, ҡаялары менән беҙгә терәк, ышыҡ булыуы.

**Атаҡлы хәҙрәтебеҙ Мөжәүир олатай "Ҡыңғырташҡа теймәгеҙ" тип әйтеп ҡалдырған. Уның был һүҙҙәрен хәҙер шул таш аҫтында радиация тәьҫире булыуы менән аңлаталар. Һеҙ был йәһәттән ниндәй фекерҙә?**

- Мөжәүир олатай дин белгесе генә түгел, ул урындағы таштарҙың, үләндәрҙең серен аңлаусы инженер ҙә, биолог та, геолог та булған. Фәйзулла ауылы эргәһендә Шүрәле тигән хикмәтле урын бар. Унда элек алтын ятҡылығы булған. Ғалимдар ул тирәнең археологик ҡомартҡыларын махсус өйрәнгән. Минеңсә, Мөжәүир олатай ул урындың йоғонтоһон үҙенсә тикшергән булғандыр. Бер мәл Фәйзулла ауылы янына геологоразведка партияһы килеп туҡтаған да, быраулай башлағандар. Пробаларын тейәп, ҡуҙғалып китергә итһәләр, тракторҙары эшләмәй, ти. Олатай тау башында уларға ҡарап көлөп торған. Унан: "Нишләп көләһең?"- тип һораған геологтар. Ул: "Ярар, егеттәр, ыҙаландығыҙ инде, тейәгән нәмәгеҙҙе кире түкһәгеҙ генә ҡуҙғалып китә алырһығыҙ", - тигән. Геологтар буш көйө ҡайтып китергә мәжбүр булған. Был хаҡта миңә Мөжәүир хәҙрәттең улы Варис ағай һөйләне.

**Беҙ өй, һарай төҙөгәндә нигеҙенә таш ҡулланабыҙ. Ғөмүмән, Уралтауҙың иң ҙур өлөшөн тәшкил иткән ташты күпме теләһәк, шул күләмдә бушлайға алып файҙаланабыҙ. Иң күп запасы Белорет, Учалы райондарында булған йөҙләү таштары ла шундай уҡ ташмы? Һуңғы ваҡытта был төр таш тирәһендә проблемалар ҡуйырҙы...**

- Был төр таштың дөрөҫ геологик атамаһы кварцлы сланецтар. Уның составында хлорид, хатта алтын да бар. Улар метаморфик тау ҡатламдарының бер төрө. Беҙ элек ул ташты бинаны йөҙләү, биҙәү өсөн файҙаланманыҡ. Хәҙер архитектура алға китте, төҙөлөш материалдары төрләнгәндә, шул юҫыҡта был таштарға ихтыяж һәм уның хаҡы барлыҡҡа килде. Рәсәй закондары буйынса, был таштар киң таралған файҙалы ҡаҙылмалар рәтенә индерелде. Совет заманында уҡ был таш урындағы вәкәләтлек ҡарамағында ине. Уларға лицензияны республикабыҙҙың Экология министрлығы аукцион аша бирә башланы. Әммә сығарыу һәм һатыу эштәре ҡырағай рәүештә алып барылды, шуның һөҙөмтәһендә киҫкен проблемалар ҙа килеп тыуҙы. Ул таштарға геологик разведкалау үткәреп, запастарын дәүләт балансына ҡуйып, шунан һуң ғына сығара башларға тейештәр ине. Йыш ҡына бындай осраҡта ғәйепле кешене эҙләй башлайҙар. Ғәйеп үҙебеҙҙә, бөтәбеҙҙә лә.

**Ҡом, ҡырсынташ, балсыҡ, тупраҡ запастары өсөн кем яуап бирергә тейеш?**

- Улар Экология министрлығы һәм урындағы властар ҡарамағында. Иң тәүҙә разведка эштәре башҡарылып, балансҡа ҡуйылғандан һуң, был байлыҡтарҙы сығарырға, ташырға рөхсәт ителә. Запастарға килгәндә, ҙур-ҙур йылғалар буйында ултырған райондарҙа ҡом, ҡырсынташ етерлек. Ә бына бәләкәй йылғалар аҡҡан Урал арьяғы райондарына улар самалы.

**Торатау тураһында ла әйтеп китһәгеҙ ине, ул ысынлап та бөгөн "Сода" өсөн берҙәнбер сығанаҡмы?**

- Түгел, әлбиттә. Башҡа урында табылған запастарҙы "Сода" берекмәһе төрлө һылтауҙар табып, эшкәртергә ашыҡмай. Ни өсөн тигәндә, Торатау Стәрлетамаҡҡа иң яҡыны һәм улар бында хеҙмәтте арзанайтыу мәсьәләһен беренсе урынға ҡуя. Торатау мәсьәләһе менән мин 25 йылдан ашыу шөғөлләнәм, тип әйтә алам. 90-сы йылдарҙа Торатауҙы эшкәртеү хаҡында һүҙ сыҡҡас, "Башкиргеология" Шахтауҙың аҫҡы өлөшөн разведкалай башланы. Разведка эштәре 2000 йылға тиклем барҙы. Унда 250 миллион тонна самаһы юғары сифатлы эҙбизташ бар. Ул запас һыу ҡатламында ята. Әгәр ҙә заводтың йылына 4 миллион тонна сеймал сығарыуын иҫәпкә алғанда, унда 62 йыллыҡ запас бар, тигән һүҙ. Беҙ Шахтау запасын балансҡа ҡуйҙыҡ, йәғни ошо юл менән Торатауға юлды япҡайныҡ, сөнки ул тәбиғи ҡомартҡы иҫәпләнә. Әммә эшкәртеүселәр Йөрәктау менән Торатауҙы ла эшкәртмәксе. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа Торатауҙы шартлатып, Ҡарлымандың шәкәр, Ишембайҙың алебастр заводтары өсөн эҙбизташ алғандар. Шул ваҡытта разведкаланған запас 5 миллион самаһы тонналы тәшкил итә. Тауҙың ҡалған өлөшө тикшерелмәгән. Йөрәктауға килгәндә, Ленинградтан геология разведкалау идаралығы тауҙы цемент өсөн тикшергән. Торатауҙың сеймалы сифат яғынан сода эшләү өсөн әллә ни яраҡлы түгел. Уны эшкәрткән хәлдә лә запасы ун биш-егерме йылға ғына етерлек. Ләкин эш уға барып етмәҫ, йәғни Торатау бынан һуң да урынында торор, тип уйлайым.

**Ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтарыбыҙҙы әрәм-шәрәм итеүгә нисек юл ҡуймаҫҡа була? Бәлки, закондар дөрөҫ түгелдер һәм эште тап шуларҙан башларға кәрәктер, нисек уйлайһығыҙ?**

- Бөтә кимәлдәге закондар ҙа яҙылған. Уларҙа хатта кем нимә эшләргә тейешлеге лә әйтелгән. Шулай булғас, ниңә ул закондар үтәлмәй һуң? Беренсенән, урындарҙа кадрҙар етешмәй, икенсенән, иң өҫтә ултырыусы етәкселектең ихтыяры кәрәк. Әгәр ҙә дөйөм системала өҙөклөк килеп сыҡҡан икән, барлыҡ проблемаларыбыҙға шул система кимәленән ҡарап эш итергә тейешбеҙ. Бер генә урында ниндәйҙер проблеманы айырып хәл итеү мөмкин булған хәлдә лә, дөйөм кризисты еңмәйенсә тороп, алға китеү мөмкин булмаясаҡ. Сөнки беҙҙә идара итеү системаһы боҙолған, идара итеү механизмы эшләмәй.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Рәсих Әғзәм улы менән килешмәү мөмкин түгел. Сағыштырыу өсөн ябай ғына миҫал килтерәйек. Әгәр ҙә автомобилдең двигателе эшлектән сыҡҡан икән, был осраҡта уның тәгәрмәсен йә булмаһа башҡа өлөшөн ремонтламайҙар. Был кинәйәне гәзит уҡыусыларҙың һәр ҡайһыһына йүнәлтәбеҙ. Кем нисек уйлай?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Ах, ҡайҙа ҡасайым? Бөттө башҡайым! Уф, Яңы йыл еткәндә харап булам. Яуыз Төлкө! "Яңы йылдан башлап мәңге дуҫ булайыҡ!"- тигән булды. Вәғәҙә бирҙе! Ә мин ышандым… Ах! (Ҡыуаҡ аҫтына ҡаса.)*



Сәрүәр СУРИНА

# ҠЫШ БАБАЙ ТАЯҒЫ,

## йәки Яңы йыл вәғәҙәһе



**Ғәмәли төркөм:**
**Ҡыш бабай.**
**Ҡуян.**
**Тейен.**
**Төлкө.**
**Бүре.**

### Беренсе күренеш

*Яңы йыл ҡаршылап йырлашҡан-бейешкән йәнлектәр геү килә.*

*Йәнлектәр берәм-берәм Ҡыш бабай алдына килеп, вәғәҙә бирә, бүләк ала.*

**Йәнлектәр (йыр-1):**

- Ҡотло булһын Яңы йыл!
- Хуш киләһең, Яңы йыл, алһыу таңдарың менән...
- Төклө булһын аяғың... Бабайҙар шулай тигән!
- Төлкө менән Ҡуян - булырбыҙ дуҫ, туған!
- Яңы йылда ялҡауҙар юҡ, әммә беҙ шәп, уңған! Ура!
- Өр-яңы йыл башлана. Иҫке ҡылыҡ ташлана!
- Дуҫлыҡ, татыулыҡ менән яңы тормош башлана!
- Бүре булыу - дан, тиҙәр. Ауыҙында - ҡан, тиҙәр.
- Яңы йылдан башлап мине иң изге йән, тиерҙәр.
- Ҡуян миңә ҡуш булыр, Төлкө миңә иш булыр.
- Һарыҡ миңә дуҫ булыр, ә Кәзә иптәш булыр!
- Дуҫ булабыҙ! Алдашмайбыҙ!
- Һуғышмайбыҙ, урлашмайбыҙ!
- Яңы йыл килә! Ура!

Бүләктәр бирә!

*Кемдә матур вәғәҙә, шуға бүләк эләгә!*

### Икенсе күренеш

*Ҡышҡы урман. Төлкө күстәнәсле тоғонда аҡтарына.*

**Төлкө (йыр-2).**

*Байрам туным кейгәйнем,*
*Йылмайғайным, көлгәйнем,*
*Ҡыш бабайға бик матур*
*Вәғәҙәләр биргәйнем:*
*Ҡуянды ла, Тейенде лә,*
*Терпене лә, Өйрәкте лә,*
*Тауыҡты ла, Сысҡанды ла...*
*Ашамаҫмын, тигәйнем.*
*Ah! Ah!...*
*Эй Ҡыш бабай һиҙмәне,*
*Шаяртҡанды белмәне,*
*Тәмле-тәмле күстәнәстәр,*
*Уйынсыҡтар һәм емештәр,*
*Минең алға өйгәйне,*
*Әйҙә, һайла, тигәйне!*
*Әйткән һүҙем уҡ, тинем,*
*Мин бит шаян, шуҡ, тинем.*
*Уйынсығын тоғо менән,*
*Күстәнәсен йөгө менән,*
*Емештәрен төгө менән*
*Алып ҡайтып киткәйнем!*
*Oh! Oh!*

Асыҡтым! Ҡыш бабайҙың күстәнәстәре бөттө! (*Тоғон атып бәрә.*) Хәҙер ҡуянды ашарға тура килә. Тсс! (*Ҡыуаҡ артына боҫа.*)

Йырлай-йырлай Ҡуян килә.

**Ҡуян (йыр-3):**

*Тыныс урман, рәхәт урман -*
*Ҡыштың бүләге.*
*Урманымда иркен йәшәү -*
*Минең теләгем.*
*Урман минеке, мин -*
*урмандыҡы.*
*Тыныс рәхәт сәхрә -*
*ул Ҡуяндыҡы!*

*Талғын музыка кинәт үҙгәрә - шомло яңғырай.*

*Ҡыуаҡ артында торған Төлкө Ҡуянға аяҡ сала. Ҡуян мәтәлләп барып ята.*

**Ҡуян.** Һаумы, хәйерле көн, Төлкө!

**Төлкө.** Асыҡтым!

**Ҡуян.** Эй, Төлкө, әкрен! Яңы йылда нимә тинең, оноттоңмо әллә?

**Төлкө.** Мин асыҡтым, ә һин йырлап йөрөйһөң? Һине ашайым.

*Төлкө Ҡуянға ташлана, баҫтырыш.*

*Ҡуян саҡ ялтанып тороп ҡала.*

**Ҡуян.** Ах, ҡайҙа ҡасайым? Бөттө башҡайым! Уф, Яңы йыл еткәндә харап булам. Яуыз Төлкө! "Яңы йылдан башлап мәңге дуҫ булайыҡ!"- тигән булды. Вәғәҙә бирҙе! Ә мин ышандым... Ах! (Ҡыуаҡ аҫтына ҡаса.)

### Өсөнсө күренеш

*Ҡыш бабай инә.*

**Ҡыш бабай.** Эй, Шешҡолаҡ!

**Ҡуян.** Ә-ә, Ҡыш бабай икән дә...

**Ҡыш бабай.** Нишләп ҡасаһың?

**Ҡуян.** Төлкөнән йәшенәм.

**Ҡыш бабай.** Йәшенмәк уйнайһығыҙ?

**Ҡуян.** Юҡ... ашайым, ти.

**Ҡыш бабай.** Ашайым, ти! Ә бит һүҙ бирҙе! Яңы йылда Төлкө лә, Бүре лә - икеһе лә Ҡуянды ашамаҫҡа вәғәҙә бирҙе.

**Ҡуян.** Һинән бүләк алыр өсөн, Ҡыш бабай, алдашҡандар улар...

**Ҡыш бабай.** Булмаҫ! Булмаҫ!

**Ҡуян.** Төлкө менән Бүре берҙе һөйләй, икенсене эшләй!

**Ҡыш бабай.** Юҡ, мин һиңә ышанмайым, Шешҡолаҡ.

**Ҡуян.** Ышанмаһаң, әйҙә, тикшереп сыҡ. Үҙең һораш, Ҡыш бабай! Кем нимә тип һүҙ биргән, кем вәғәҙәһен боҙған... Күрерһең...

**Ҡыш бабай.** Икәүләп йөрөйбөҙ, тик мин күренмәйем. Һин һорайһың.

**Ҡуян.** Күренмәйһең? Юҡ, һинһеҙ мин ҡурҡам.

**Ҡыш бабай.** Бына һиңә таяҡ. Кәрәк булһам, "Ҡыш бабай, туҡ-туҡ!" тип әйтерһең.

**Ҡуян.** Нисек туҡ-туҡ?

**Ҡыш бабай.** Һин әйтәһең "туҡ-туҡ", килеп етәм тып-тып.

**Ҡуян.** Туҡ-туҡ, тып-тып... Аңланым! Мин "туҡ-туҡ", һин тып-тып! Шәп!

*Тылсымлы көй. Ҡыш бабай ҡуянға таяҡ тоттора ла, серле хәрәкәттәр яһап, күҙҙән юғала.*

**Ҡуян.** Ниндәй матур таяҡ! (Тегеләй-былай йөрөп ҡарай.) Әһә! Таяҡты тотоп, арыҫландың ҡаршыһына барып баҫһам?.. Брр... бер ни ҙә булмай, хи-хи... (*Ҡыланып.*) Арыҫлан ғәли йәнәптәре! Эй юҡ, Арыҫлан ағай! Былай ҙа була: Арыҫлан туған! Әһе, мин һиңә ҡунаҡҡа килдем. (*Арыҫлан булып ҡылана*) Oho-ho, һин ниндәй батыр икәнһең, Шешҡолаҡ! (*Үҙенең ролендә*) Эйе-эйе, донъяла иң батыр йәнлек мин! (*Арыҫлан булып ҡылана*) Ҡотлайым, һине иң тәүҙә күреүемә шатмын, Шешҡолаҡ!.. Әллә үҙеңде ҡосаҡлайыммы?.. Ырр! (*Үҙенәнүҙе ҡото осоп, дерелдәп төшә*) Ah! Ҡы... Ҡыш бабай! Ҡотҡар! (*Иҫенә килеп*) Уф, йота яҙҙы... Туҡтале, әгәр ысынлап та арыҫлан тап булһа? Мин таяҡтың дөрөҫлөгөн тикшереп ҡарарға тейеш. Ҡыш бабай, туҡтуҡ! (*Тылсымлы көй. Ҡыш бабай инә.*)

**Ҡыш бабай.** Мин барыһын да күреп торам, ишетеп торам!

**Ҡуян.** Һынау уңышлы үтте, Ҡыш бабай!

**Ҡыш бабай.** Һай, зирәк! Белеп тор: был таяҡ менән һуҡҡан нәмә боҙ булып ҡата...

**Ҡуян.** Боҙ? Oh!

**Ҡыш бабай.** Таяҡ менән бушҡа һелтәнмә. Туңған нәмәне иретеү ҡыйын.

**Ҡуян.** Ярай, ярай...

*Тылсымлы көй, Ҡыш бабай күҙҙән юғала.*

**Ҡуян** (*таяҡты уйната*). Их, шундай мажара, ҡыҙыҡ булаcаҡ! **(Йыр-4):**

*Туҡ-туҡ-туҡ-туҡ,*
*Таяҡ ҡулымда.*
*Торма юлымда!*
*Туҡ-туҡ-туҡ-туҡ,*
*Тылсым бик ябай.*
*Таяҡ - Ҡыш бабай.*
*Туҡ-туҡ-туҡ-туҡ,*
*Ҡыҙыҡ йомошом:*
*Вәғәҙә һорашам!*

### Дүртенсе күренеш

*Ҡуян алдына Төлкө килеп сыға.*

**Төлкө.** Әһә, ҡапты! Ҡасҡалаҡ!

**Ҡуян.** Мин һинән... ҡасмайым!

**Төлкө.** Ҡасма шул, ҡасма!

**Ҡуян.** Мин хәҙер һинән... ҡурҡмайым!

**Төлкө.** Ҡурҡма шул! Ҡурҡма... Ә ниңә?

**Ҡуян.** Туҡ-туҡ, белдеңме?

**Төлкө.** Ҡана әле, ике ҡолағыңды бергә төйнәп ҡуям!

**Ҡуян.** Яҡын килмә. Таяҡ менән берҙе!.. Тондорам!

**Төлкө.** Тондор.

**Ҡуян.** Ҡундырам!

**Төлкө.** Ҡундыр!

**Ҡуян.** Туңдырам!

**Төлкө.** Туңдыр!

**Ҡуян.** Боҙ булып ҡатаһың!

**Төлкө.** Ҡатам! Боҙ?

**Ҡуян.** Ҡундырам да туңдырам!

**Төлкө.** Ой! Ҡурҡам!

**Ҡуян.** Шулай була ул!

**Төлкө.** Ҡана, таяғыңды тотоп ҡарайым. Бир әле! Бир!

**Ҡуян.** Ҡағылма! Туңдырам!

**Төлкө.** Йәле, һуҡ бынау ағасҡа.

**Ҡуян.** Ағастың ни ғәйебе бар?

**Төлкө.** Һуҡ ошо төпһәгә!

**Ҡуян.** Төпһәнең дә ғәйебе юҡ.

**Төлкө.** Минең дә ғәйебем юҡ. Ә һин - ғәйепле! Таяҡ тотоп, ҡупырайып йөрөйһөң, маҡтансыҡ!

**Ҡуян.** Маҡтанмайым. Ул тылсымлы...

*Төлкө Ҡуянды төрлөсә үсекләп ҡамай.*

**Төлкө (йыр-5):**

*Маҡтансыҡ, ҡупыйсыҡ,*
*Башы әйләнгән ҡуянсыҡ!*
*Aha-ha, aha-ha!*
*Таяҡ менән маһая!*
*Айыу, сыҡ! Терпе, сыҡ!*
*Йоҡлап ятмағыҙ!*
*Урманда кәмит -*
*Күрмәй ҡалмағыҙ!*
*Ҡуян таяҡ атланған,*
*Тылсымлы, тип маҡтанған!*
*Ҡыу таяғы тыҡылдай,*
*Ҡуян яҙған аҡылдан!* Фу, иҫәр! Ха-ха!

**Ҡуян.** Ах! (*Төлкөгә таяҡ менән ынтыла. Баҫтырышалар.*) Ә-ә, ҡасаһың, ҡурҡаһың, ышанаһың!

**Төлкө.** Ышандым - көтөп тор, таяғыңды тотоп тор!

**Ҡуян.** Күрмәһәң - күр, ышанмаһаң - ышан! (*Таяҡ менән төпһәгә һуға*)

*Тылсым сыңлай. Төпһә боҙға әйләнә.*

**Ҡуян.** Уй-ой! Ҡыш бабай! Боҙ!

*Ҡуян ҡурҡышынан таяҡты күтәреп сығып саба.*

**Төлкө.** Боҙ! Туңдыра... Был ниндәй сер? Белергә! Алырға!

*Ҡыуаҡтан-ҡыуаҡҡа боҫа-боҫа, Ҡуян артынан китә.*

### Бишенсе күренеш

*Ағас төбөндә Тейен алмаларын теҙеп-һанап ултыра.*

**Тейен (йыр-6):**

*Алма матур, алма матур,*
*Яңы йыл алмалары,*
*Яңы йыл алмаларын*
*Һайлайым аллыларын.*
*Нисек ашап бөтөргә?*
*Нисек ҡышты үтергә?*

*Урман буйлап елдергән Ҡуянды, уны юллап килгән Төлкөнө күрә.*

**Ҡуян (йыр-7):**

*Ләл-ләләм, ләл-ләләм,*
*Бер тылсым беләм!*
*Ҡундырам да туңдырам,*
*Бер һелтәү менән!* (*Таяғын уйната*)
*Ләл-ләләм, ләл-ләләм,*
*Яңы йыл менән!*
*Мажара таптыҡ*
*Ҡыш бабай менән!*

**Тейен.** Эй, Ҡуян, артыңа ҡара! Ҡас, ҡас тиҙерәк! Артыңда - Төлкө!

**Ҡуян.** Килһен, килә бирһен. Ҡурҡмайым, Тейенкәй! Һин дә ҡурҡма!

**Тейен.** Нисек былай батырланып киттең?

**Ҡуян.** Был нимә?

**Тейен.** Таяҡ! Семәрле, матур...

**Ҡуян.** Тылсымлы!

**Тейен.** Ә нимәлә тылсымы?

**Ҡуян.** Кем беҙгә тейә, һыртына - шаҡ! Боҙ булып ҡат!

**Тейен.** Ә ҡайҙан алдың?

**Ҡуян.** Эй, ысын, һин башта әйт, Ҡыш бабайға ниндәй вәғәҙә бирҙең? Һөйлә таяҡҡа: биргән вәғәҙәңде нисек үтәйһең?

**Тейен (йыр-8):**

*Көлтәғойроҡ елп итә,*
*Көнө-төнө мин эштә:*
*Сәтләүегем өс һандыҡ,*
*Бәшмәк йыйҙым*
*биш һандыҡ.*
*Сәтләүегем ярыла,*
*Ергә еме ҡойола,*
*Сысҡаны ла, турғайы ла*
*Ем ашарға йыйыла.*
*Көлтәғойроҡ елп итә,*
*Бергә-бергә ҡыш үтә.*
*Таяҡҡа хәбәр һөйләтеп,*
*Кем мине мыҫҡыл итә?* Етте!

**Ҡуян.** Ул бит тылсымлы.

**Тейен.** Бер һүҙҙе туҡый ҙа туҡый: тылсым, тылсым... Ышанмайым!

**Ҡуян.** Шулаймы? (*Алмаларға һуға. Тылсым сыңы*)

**Тейен.** Аh, алмалар туңды! Боҙ алмалар!

**Ҡуян.** Ышандыңмы?

**Тейен.** Хикмәт...

**Ҡуян.** *Туҡ-туҡ! Туҡ-туҡ!*
*Тылсым бик ябай.*
*Таяҡ - Ҡыш бабай.*
*Туҡ-туҡ-туҡ-туҡ,*
*Ҡыҙыҡ йомошом:*
*Вәғәҙә һорашыу! Ысын!..*

***✓ Туған телдәрҙе үҫтереүгә ярҙам фонды ошо мәсьәләлә балалар театрҙарына ҙур терәк була алыр ине. Юғиһә, уның бурысы туған тел дәреслектәре баҫтырыуға ғына ҡайтып ҡалмаҡсы.***



**Тейен.** Төлкөнән һаҡ бул (*Ағас башына менеп китә*).

**Ҡуян.** Төлкө үҙе минән ҡурҡа хәҙер, ха-ха! (*Сыға*).

*Төлкө күренә.*

**Төлкө.** Шәп таяҡ! Миңә эләкһәме, белер инем нишләргә...

**(Йыр-9):**

*Шаҡ-шоҡ - туңдырам,*
*Ҡунаҡ саҡырам!*
*Ҡунаҡ алдына*
*Туңдырма ҡуям:*
*Йәнең ни теләй -*
*Туңдырма - еләк,*
*Туңдырма - тауыҡ,*
*Туңдырма - өйрәк!*
*Туңдырма аша!*
*Һыйым килешә!*
*Ҡунаҡтарҙың*
*Тамағы шешә!* Ҡх-ҡх! Таяҡ минеке була! Алға!

*Ҡуян артынан саба.*

## Алтынсы күренеш

*Ҡуян инә, артынса Төлкө килә.*

**Ҡуян.** Тейен менән һөйләштем. Бүрене табырға кәрәк. Төлкө аңһат ысҡынды.

**Төлкө.** Ысҡынманым. Мин бында!

**Ҡуян.** Уф!

**Төлкө.** Ҡалтыранма, әллә таяҡтың көсө бөтөп ҡуйҙымы?

**Ҡуян.** Таяҡ үҙ көсөндә. (*Таяҡҡа ҡарап ҡуя.*) Һин бик ваҡытлы тап булдың.

**Төлкө.** Мин һәр ваҡыт эргәндә. Һинең батырлыҡҡа һоҡланып йөрөйөм.

**Ҡуян.** Йә, әйт миңә, Ҡыш бабайға ниндәй вәғәҙә бирҙең?

**Төлкө.** Бик шәп, бик матур вәғәҙәләр бирҙем. Ҡыш бабайға оҡшаны.

**Ҡуян.** Йә, ҡабатла, нимә тип һүҙ бирҙең?

**Төлкө.** Ҡыш бабай ышанды!

**Ҡуян.** Иҫеңә төшөрәм! Бынан ары ҡуян менән татыу йәшәрбеҙ, тинең!

**Төлкө.** Бына ла, бик күңелле һөйләшеп торабыҙсы! Таяҡты бергә!..

**Ҡуян.** Ҡағылма уға!

**Төлкө.** Яҡшы йәшәйбеҙ, урман да уртаҡ, таяҡ та!

**Ҡуян.** Таяҡ уртаҡ түгел!

**Төлкө.** Мине рәнйетәһең! Тылсымлы таяҡты тоттормайһың да. Урманда мин дә йәшәйем, таяҡҡа минең дә хаҡым бар, белдеңме! Ҡарауыл, был урманда мине ситләтәләр! Ҡуян мине кәмһетә...

**Ҡуян.** Юҡ, һөйләшеп булмай һинең менән. Бүре янына барам.

**Төлкө.** Мин дә барам. Ух, беҙ ул бүрене, һыртына берҙе - шаҡ! Бүре, боҙ булып ҡат!

**Ҡуян.** Юҡ, эйәрмә, Төлкө.

**Төлкө.** Минән дә тоғро юлдаш тапмаҫһың, Бүрегә яңғыҙыңды ебәрә алмайым. Таяғың булһа ла... Уның вәғәҙәләрен һә тигәнсе иҫенә төшөрәбеҙ. Үҙем һөйләшәм, һин тыңлап тораһың. Таяҡты тотоп ҡына...

**Ҡуян.** Ярай, барайыҡ.

**Төлкө.** Таяғыбыҙҙы туҡылдатып барайыҡ - урман дер һелкенеп торһон!

**Ҡуян.** Юҡ, урман йоҡлай... йоҡлаһын.

**Төлкө.** Уянһын!

**Ҡуян.** Йоҡлаһын! Тсс!..

## Етенсе күренеш

*Бүре инә.*

**Бүре.** Кем йоҡлаһын? Кем уянһын?

**Төлкө** (*атылып алға сыға*). Бик асыҡтыңмы, Бүре ағай?

**Бүре.** У-у...

**Төлкө.** Нимә ашар инең?

**Бүре.** Бынау Ҡылыйҙы.

**Төлкө.** Һарыҡ кәрәкмәйме?

**Бүре.** Булһын ғына - а-ам!

**Төлкө.** Кәзә йәки быҙау яраймы?

**Бүре.** Бигерәк тәмле һөйләйһең, үҙең дә ярайһың!

**Төлкө.** Ҡыш бабайға һүҙ бирҙең бит: Ҡуянды ашамам... Ашар инеңме?

**Бүре.** Һоғоноп- һоғоноп...

**Төлкө.** Әйткән һүҙҙе кем тота?

**Бүре (йыр-10):**

*Онотолдо әйткән һүҙ -*
*Ана тора ҡылыйгүҙ,*
*Миңә ҡарай ҙа ҡарай,*
*Аша мине, ти буғай!*
*Яратам, яратам*
*Аҡ сәсле ҡуян ҡыҙын!*
*Их, тәмле, ух, тәмле*
*Күк сәсле ҡуян ҡыҙы!*
*Һоғонам, ашайым*
*Маҡтансыҡ ҡуян улын!*
*Аҡ сәсле ҡуян ҡыҙын!*
*Күк сәсле ҡуян ҡыҙын!*

*Бүре Ҡуянға ташлана, Ҡуян әсе ҡысҡырып, уға таяҡ менән һуға.*

*Көй сыңлай. Бүре боҙ булып ҡата.*

**Төлкө.** Шул кәрәк һиңә, алдаҡсы бүре! Ай, шәп иттең. Ҡуян дуҫ, һин батыр! Урман батыры! Яуыз бүренән ҡотҡарҙың беҙҙе! Рәхмәт, ҡотҡарыусы! Мине лә ашай яҙҙы бит ул! Рөхсәт ит, берике туҡмаҡ өҫтәйем! Минең дә батырлыҡ эшләгем килә!

**Ҡуян.** Мә! Һуҡ! (*Таяҡты Төлкөгә тоттора*)

**Төлкө.** Уах! Уах!... (*Таяҡты эләктереп ала*)

**Төлкө (йыр-11):**

*Боҙ бүре, боҙ бүре!*
*Ҡасан боҙ ирер?*
*Былай булғас, беҙҙең урман*
*Ҡалды бүреһеҙ!*
*О-о, ҡыҙыҡ, мәрәкә -*
*Ҡалдыҡ бүреһеҙ.*
*Мин хужа хәҙер урманда,*
*Бына күрегеҙ!*

**Ҡуян** (*аңлап*). Бир, таяҡты кире бир!

**Төлкө.** Ха-ха!.. Бирҙе, ти, көтөп тор! Миңә тейеш ул таяҡ! Туңдырам!

**Ҡуян** (*ялтанып ҡаса*). Ҡыш бабай! Ҡыш бабай!

*Төлкө Ҡуянға таяҡ менән һуға. Тылсымлы көй. Ҡуян боҙға әйләнә.*

**Төлкө (йыр-12):**

*Боҙ бүре, боҙ ҡуян!*
*Бына мәрәкә!*
*Шулай була минең ҡулға*
*Таяҡ эләкһә!*
*Мин, мин, мин - таяҡтың*
*Хужаһы булам!*
*Бик тәмле булыр ул*
*Туңдырма-Ҡуян! Ха-ха! Туңдырма-Ҡуян!*

## Һигеҙенсе күренеш

*Тейен күренә.*

**Тейен.** Ҡуян? Бүре? Боҙ булған!

**Төлкө.** Ҡуян ғәйепле. Ул башланы. Ул эш боҙҙо!

**Тейен.** Был таяҡ - Ҡыш бабай үҙе бит. Ул бөтәһен дә күреп тора.

**Төлкө.** Тсс, шаулама! (*Таяҡ менән киҙәнә*).

*Тейен ситкә ҡаса.*

**Төлкө (йыр-13):**

*Тылсымлы таяҡ,*
*Һинән бер файҙа:*
*Яманлыҡ ниҙә,*
*Яҡшылыҡ ҡайҙа?*
*Тылсымлы таяҡ,*
*Һин - серле йомаҡ!*
*Артыҡ ышанһаң,*
*Һин - хәтәр тоҙаҡ!* (*Боҙ-Бүре менән боҙ-Ҡуян янына килә.*) Нишләтергә һеҙҙе?

**Тейен.** Ҡыш бабай күрәгеңде бирә!

**Төлкө.** Мин ғәйепле түгел. Ҡуян ғәйепле, белдеңме...

**Тейен.** Ҡыш бабай күрәгеңде бирә былай булғас! Бүре менән ҡуян янында һин торасаҡһың. Боҙ-Төлкө, боҙ-Төлкө, тылсымлы таяҡ тотоп, булдың бит көлкө!

**Төлкө.** Был таяҡты күргәнем дә юҡ. (*Таяҡты ташлай*).

*Тейен таяҡты эләктереп ала.*

**Тейен.** Вәғәҙәңде иҫеңә төшөр, Төлкө!

**Төлкө (йыр-14).**

*Ниндәй вәғәҙә?*
*Ғәҙеллек ҡайҙа?*
*Тылсымлы таяҡ*
*Йәнә быларҙа!*
*Бына бит көлкө!*
*Тейен, һаташма,*
*Мине ҡурҡытам*
*Тиеп маташма.*

**Тейен.** Яҡын килмә, өлөш эләгә!

*Төлкө ҙурыраҡ таяҡ алып, уға ҡаршы тора.*

*Тейен таяғы менән Төлкөнөң таяғына һуға.*

*Төлкөнөң таяғы ғына боҙға әйләнә, ә ул үҙе үҙгәрмәй.*

**Төлкө.** Оһо, минең таяҡ - боҙ! Ә үҙем - туңмайым! Әһә, һинекенең көсө бөткән! Таяҡ - Ҡыш бабай түгел! (*Ҡылыс сабышҡан кеүек таяҡтар менән һуғышалар*) .

**Тейен.** Ҡыш бабай, һин ҡайҙа?

**Төлкө.** Оноҭҡан ул һине! Ҡаҫҡан!

**Тейен.** Ҡыш бабай, Ҡыш бабай! Кил инде!

**Төлкө** (*Ҡыш бабай булып тейенде үсекләп*). Киләм, киләм, туҡмаҡ ашатам!

**Тейен.** Туҡмаҡ? Туҡ-туҡ? Ҡыш бабай! Туҡ-туҡ!..

*Тылсым сыңы. Ҡыш бабай пәйҙә була.*

**Төлкө.** Ҡыш бабай? Тейен тилергән! Ҡуян ҡоторған! Миңә бәйләнәләр. Мин һаҡландым! (*Күҫәк уның ҡулына йәбешкән*) Ах! Ысҡынмай! Ауырта! Тәпәйем өҙөлә. Нишләргә миңә, Ҡыш бабай?

**Ҡыш бабай.** Һөйрәп йөрөрһөң боҙ күҫәкте!

*Тылсымлы көй.*

**Ҡышбабай (йыр-15):**

*Яңы йылға кем инә?*
*Саф күңелле, шат инә.*
*Боҙҙо нимә иретә?*
*Ихлас ғәфү - шул етә.*
*Яңы йылға бергә-бергә*
*дәррәү инеп китегеҙ,*
*Бер-берегеҙгә татыулыҡ,*
*дуҫлыҡ бүләк итегеҙ!*

*Таяҡ менән ҡағыла - йәнлектәр боҙҙан ҡотола.*

**Төлкө.** Ҡыш бабаҡай, мин ҡуянды Рәнйетмәйем бүтән.

**Ҡыш бабай.** Рәнйетмәһәң ҡуянды, Ғәфү итәм, итәм.

**Бүре.** Ҡыш бабаҡай, мин ҡуянды ашамайым бүтән.

**Ҡышбабай.** Ашамаһаң ҡуянды Ғәфү итәм, итәм.

**Ҡуян.** Ҡыш бабаҡай, мин Төлкөнән ҡурҡмайым күптән.

**Ҡыш бабай.** Ҡурҡмаһың бер кемдән дә, ғәфү итәм, итәм.

*Бөтәһе бергә:*

*Борон заманда*
*Беҙҙең урманда*
*Шундай хәл булған, -*
*Һис түгел ялған.*

*Яңы йыл һайын*
*Иҫке мажара*
*Шулай яңыра, -*
*Дуҫлыҡ нығына!*

*Ҡыш бабай менән күмәк йырбейеү.*

### ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР

**Сәнғәт милләттең йөҙөн билдәләй, тиҙәр. Бик хаҡ һүҙҙәр. Шөкөр, башҡорттоң милли бейеүе лә, бөтөн донъяла классик өлгө тип танылған опералаҙы уҙып киткән халыҡ йырҙары ла, балеты ла (Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла балет театры эшләй һәм унда "Сыңрау торна" кеүек балеттарҙа башҡорт бейеүселәре бейей!), театры ла, архитектураһы ла, һынлы сәнғәте лә бар. Ошоларҙы уйлаһаң, күңелдә милләтең өсөн ғорурлыҡ тойғолары уяна. Әммә был өлкәлә бөгөн үк хәл ителергә тейешле проблемалар бар, уларҙың иң мөһимдәренең береһе балалар театрҙары менән бәйле.**

# БАЛАЛАР ТЕАТРЫ...

## туған тел һаҡсыһы ул

Дөрөҫөрәге, милли балалар театрҙарында бәләкәйҙәргә тәғәйенләнгән әкиәттәрҙең, спектаклдәрҙең башҡортса уйналмауы хафаға һала. Театрҙарға балалар спектаклдәрен башҡортса уйнау өсөн башҡортса аңлаған тамашасы кәрәк. Парадокс, беҙҙә уларҙы йыйып булмай. Тәржемә менән ҡараһындар, тип әйтеү ҙә дөрөҫ түгел. Бала кеше ҡолаҡсын менән уйнап ултырһа ултырасаҡ, әммә спектаклде эсенә сумып китеп ҡарамаясаҡ. Тәржемә менән спектакль ҡарауҙың ауырлығын, өлкәндәр, үҙегеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ. Яңы йыл байрамдары осоронда ата-әсәләрҙең, башҡортса спектаклдәр юҡ, тип шаулап алырын да белеп торам. Әммә байрамдар үтеү менән барыһы ла онотоласаҡ, театр был проблема менән яңғыҙы тороп ҡаласаҡ. Байрамға башҡорт тамашаһы талап иткән әсәй ҙә йыл дауамында балаһын бер тапҡыр ғына булһа ла башҡорт спектакленә алып бармаясаҡ. Ваҡыт юҡ, эшләйем, өлгөрмәйем, билет ҡиммәт һ.б тип һылтауын да табасаҡ. Ә спектакль сәхнәлә бер тапҡыр ғына уйналыр өсөн ҡуйылмай, юғиһә, ни өсөн ижади коллектив уның өсөн көс һалырға тейеш? Балалар театрында эшләгән актер өлкән тамашасылар өсөн хеҙмәт иткән актерҙан айырылмай, киреһенсә, балалар өсөн уйнағанда күберәк энергия талап ителәлер әле.

Тамашасыһыҙ булһа ла, башҡортса әкиәттәр уйнау ҙа хәлдән сығыу юлы түгел. Бөгөнгө заман театрының баҙар ҡиммәте бар. Ул бөгөн һатырға тейеш, күпме һатырға тейеш - уныһын үҙенән өҫтә торған ойошмалар билдәләй. Әкиәтте башҡортса һата алмай икән, русса һата. Һатмаған өсөн башынан һыйпамағастар, нишләһен һуң? Иң ҡыҙығы, был турала барыһы ла белә, тик белмәмешкә һалыша, ахыры. Театр кешелек капиталын формалаштырыуға ҙур өлөш индерә, тибеҙ, өлкәнең үҫешен билдәләрҙәй концепциялар ҙа яҙыла. Тик матур һүҙҙәр ҡағыҙҙа ғына. Мәңгелек әхлаҡи ҡиммәттәр өлгөһөндә тәрбиәләнгән бала киләсәктә яҡшы кеше, һөнәр эйәһе буласаҡ, йәшәгән илен тағы ла матурырыҡ, байыраҡ итергә тырышасаҡ. Театр эшмәкәрлегенең кешегә социаль-мәҙәни тәьҫирен үлсәүгә һалып үлсәп тә булмай, әммә ул театрҙың баҙар ҡиммәтенән күпкә ауырыраҡ тартасағына шигем юҡ. Һуңғы 30 йылда матди етештереүсәнлек өлкәһендә ҡулланылған үҙгәртеп ҡороуҙарҙың социаль-иҡтисади өлкәгә ҡағылыуынан бер файҙа ла күрмәнек түгелме ни? Тикшеренеүҙәр дәлилләй бит: дотацияларҙы иҫәпкә алмағанда, Рәсәй дәүләт театрҙары араһында коммерция йәһәтенән уңышлы бер генә ойошма ла юҡ. Рәсәйҙә генә түгел, бөтөн донъяла театр тәбиғәте менән иҡтисади йәһәттән файҙаһыҙ. Шуға ла был мәҙәниәт усағынан килем алырға тырышыуҙың фәтүәһе юҡ. Ә бөгөн башҡорт балаһын милли театрға йәлеп итмәйбеҙ икән, киләсәктә өлкәндәр театрҙарының да тамашасылары булмаясаҡ, ул башҡорт милли сәнғәте менән, тимәк, халҡы менән дә ғорурланмаясаҡ. Туған телде һаҡлау буйынса күпме ҡанундар булды, балалар театры бит телде һаҡлауҙа аҙаҡҡы урында тормай. Ә ул ошо мөһим бурысын үтәү иҫәбенә аҡса эшләргә тейеш, дәүләт үҙе уны ошондай уңайһыҙ хәлгә ҡуя. Әйткәндәй, Рәсәйҙә яңыраҡ төҙөлгән Туған телдәрҙе үҫтереүгә ярҙам фонды ошо мәсьәләлә балалар театрҙарына ҙур терәк була алыр ине. Юғиһә, уның бурысы туған тел дәреслектәре баҫтырыуға ғына ҡайтып ҡалмаҡсы. Дәреслек өсөн Фонд түгел, Мәғариф министрлығы яуаплы һәм уның өсөн тейешле рәүештә финанслана ла. Шул уҡ министрлыҡтың балалар театрының яҡын дуҫы булырға тейешлеге лә аңлашыла бит.

Рәсәйҙең 41 төбәгендә балалар, йәш тамашасылар театрҙары бөтөнләй юҡ. Дөйөм ил буйынса эшмәкәрлеге йәш быуынға тәғәйенләнгән театрҙар дәүләт һәм муниципаль театрҙарҙың 10 процент тирәһен генә тәшкил итә. Ә беҙҙең республикала балалар театрҙары бар һәм ул берәү генә түгел! Уларҙың эшмәкәрлегенә битараф булмайыҡ әле, йәмәғәт. Театр сәнғәтен артабан үҫтереү маҡсатында 2019 йылды Театр йылы тип иғлан итте ил Президенты. Ошо айҡанлы булһа ла балалар театрҙарында булған тел проблемаһын хәл итеү юлдары эҙләнмәҫме икән, тип өмөт итәм.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

✓ ***Ә сумма, уларҙың фекеренсә, бик юғары. Шуға күрә Радий Хәбиров беҙгә мәсьәләне өйрәнергә һәм нормативтарға, тарифтарға аныҡ дәлилдәр килтерергә ҡушты, - тип белдергәйне Михаил Киреев***



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘ ТОРҒАН УҢҒАН

■ Төҫ ризыҡтың тәменә тәьҫир итә, ти белгестәр. Бына беҙҙең аңыбыҙҙа теге йәки был ризыҡ тураһында формалашҡан фекер ҙә ризыҡтың тәмен үҙгәртә ала икән. Пенсильвания университеты хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, һары төҫтәге эсемлекте беҙ әскелтем, мәҫәлән, лимонад, ә ҡыҙыл эсемлекте татлы тип ҡабул итергә өйрәнгәнбеҙ. Иң ҡыҙығы, күптәр ҡаратйғансы ошо фекерен үҙгәртмәй икән. Һынауҙар быны тулыһынса раҫлаған. Һары төҫтәге эсемлек татлы булған хәлдә лә, ул күптәргә әскелтем тойтолған.

■ Геронтопротекторҙар - ҡарт кешеләрҙең хәлен яҡшыртыусы матдәләр шулай атала. Күптән түгел Солков институты уларҙың яңыларын уйлап тапҡан. Әлеге мәлдә улар менән ҡомаҡтар "дауалана". Улар мейене һаҡлай һәм Альцгеймер ауырыуын дауалау һәләтенә эйә. Был препараттарҙың нигеҙендә үҫемлек компоненттары ята: физетин (ул баҡса еләгендә күп) һәм куркумин (куркума тәмләткесендә бар). Эксперимент күрһәтеүенсә, был препараттар мейене ҡартайыуҙан һаҡлай, шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Хәҙер белгестәр был препараттарҙың башҡа ағзалар эшмәкәрлегенә, әйтәйек, бөйөргә йәки мускулдарға тәьҫирен ныҡлап өйрәнмәксе.

■ Юмор тойғоһо парҙар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ыңғай тулҡынға көйләй. Был бигерәк тә ирҙәр өсөн мөһим. Әммә юмор киҫкен булырға тейеш түгел. Агрессив юмор, әйтәйек, бер-береңде мыҫҡыллау кире тәьҫир итә. Ғаилә парҙарының икеһе лә юморҙы бер төрлө аңлаһа, тағы ла яҡшыраҡ. Шул уҡ ваҡытта, статистика буйынса, ирҙәр араһында шаяртырға яратыусылар күберәк иҫәпләнә. Статистиканың тағы бер ҡыҙыҡлы яңылығы - тарҡалыу алдындағы ғаиләнең хәлен гел генә шаяртып хәбәр һөйләгән ир тағы ла киҫкенләштерә икән. Ҡатындың бар нәмәне шаяртыуға бора белеүе, киреһенсә, ғаиләне нығыта, имеш. Ә бына шаяртырға яратыусы ире эргәһендә ҡатын үҙен күпкә тынысыраҡ та, бәхетлерәк тә тоя.

■ Организмдың эске ритмы тәбиғәт циклы менән бәйле. Әгәр ҙә электр уты булмаған дәүерҙәрҙә көн иткән боронғо кешеләр һымаҡ йәшәһә, кеше үҙен күпкә сәләмәтерәк тойор ине. Биологик яҡтан ҡарағанда кеше иртән яҡтырғанда торорға һәм кисен ҡояш байығас та йоҡларға ятырға тейеш. Электр уты ҡулланыу уның ошо тәбиғи ритмын боҙа, һөҙөмтәлә арыу, депрессия, хәүеф тойғоһо барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа 33 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Таңғы 6-нан да һуң ҡалмай торғандарҙа депрессия хәүефе 25 процентҡа түбән булыуы асыҡланған. Писхологтар билдәләүенсә, иртә тороу яңы көнгә ыңғай тойғолар менән инергә булышлыҡ итә. Шулай уҡ бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта тороу ҙа мөһим. Йоҡларға ятырҙан 6 сәғәт алда кәһүә эсергә кәңәш ителмәй. Тәбиғи яҡтылыҡта булыу, физик яҡтан әүҙемлек шулай уҡ сәләмәтлек һәм энергия сығанағы.

КӨН ҠАҘАҒЫНА

# ТАҒЫ ТҮЛӘРГӘ!

## Был юлы сүп-сар өсөн



**"Инәй, ауылда сүп-сарҙы, аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтарын нишләтәһегеҙ ул?" -Телефон аша бирелгән һорауым оло йәштәге инәйемде аптыратыу ғына түгел, шаңҡытты, шикелле. "Яндыра торғанын яндырабыҙ, ризыҡ ҡалдыҡтарын малға ашатабыҙ", - тине инәйем. "Ә ҡалай ҡапҡастар, консерва һауыттары, пластик һауыттарҙы?" - тип һаман ныҡышам. "Тимер ҡапҡастарҙы баҡсалағы ағастарҙың төбөнә күмәбеҙ, үҙенә күрә ашлама ул..."**

Яңы йылдан республика халҡы коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙә сүп-сарҙы йыйыу һәм сорттарға айырыу өсөн дә түләй башлаясаҡ. Был яңылыҡ хатта бәләкәй ауылдарҙа йәшәүселәргә лә ҡағыла, тигәс, элек-электән ауыл халҡы сүп-сарҙы яҡҡанын яғып, серетмәгә һалғанын серетмә итеп өйрәнгәнлектән, аптырап бирҙем һорауымды. Сөнки заманалар, әйтеүҙәренсә, яҡшы яҡҡа үҙгәргән һайын, планетабыҙҙы сүп-сар баҫа бара. СССР заманы менән сағыштырғанда, хәҙер беҙ көнкүреш ҡалдыҡтарын, сүп-сарҙы 2,5 тапҡырға артығыраҡ булдырабыҙ икән. Сәбәбе нимәлә тип уйлап ҡарағанығыҙ бармы? СССР заманында магазиндан алған бөтөн нәмә (ҡағыҙ ҡаптар) яна, йәки икенсе тапҡыр ҡулланыла (быяла шешәләр, полиэтилен тоҡтар) ине. Тормошобоҙға яңы технологияларҙың килеп инеүе сүп-сарҙың артыуына килтерҙе - ҡулланған әйберҙәр бер генә тапҡыр файҙалана торған материалдан эшләнә, ялтыр-йолтор ҡаптар, пластик, полиэтилен янмай ҙа, тарҡалмай ҙа, серемәй ҙә...

Шулай итеп, республика Хөкүмәте уҙған йылдың көҙөндә халыҡ һәм бизнестың төрлө төрҙәре өсөн ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар производствоһы нормативтарын раҫланы, ләкин был бик күп һорауҙар тыуҙырҙы, шуға хәҙер уларҙы яңынан ҡарарға кәрәк. Төбәк операторҙарының сүп-сар сығарыу буйынса тарифты түбәндәге нормативтар нигеҙендә иҫәпләүе күҙ уңында тотолғайны: яҡынса билдәләүҙәр буйынса, күп фатирлы йортта йәшәгән бер кешегә айына түләү яҡынса 140,92 һум, шәхси йортта йәшәгәнгә 200,54 һум тәшкил итергә тейеш. Шәхси йортта йәшәүсе ғаилә биш кешенән торһа, айына 1000 һумдан ашыу сумма сығарып һалырға тура киләсәк. Һандарҙағы айырманың сәбәбе, йәнәһе лә, шәхси йортта йәшәүселәр сүп-сарҙы күберәк барлыҡҡа килтерә: күп фатирлы йортта йәшәүсенән бер йылда 2,6 кубометр сүп-сар ҡалһа, шәхси йортта йәшәүсенән - 3,7 кубометр.

- Йәмғиәттә көсөргәнешлек тыуҙы. Халыҡ ҡалала һәм ауылда йәшәүселәр өсөн тарифтарҙың ниндәй нормативтарҙан сығып билдәләнеүен аңламай, ә сумма, уларҙың фекеренсә, бик юғары. Шуға күрә Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров беҙгә мәсьәләне өйрәнергә һәм нормативтарға, тарифтарға аныҡ дәлилдәр килтерергә ҡушты, - тип белдергәйне төбәктең торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Михаил Киреев ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар йыйыу нормативтарын раҫлау мәсьәләләре буйынса ултырышта. Әле Башҡортостанда был мәсьәлә буйынса махсус ведомство-ара комиссия ойошторолған. Уның составына профилле министрлыҡтар һәм ведомстволар белгестәре, төбәк операторҙары, муниципалитеттар, йәмәғәт ойошмалары, шул иҫәптән Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә йәмәғәт контроле төбәк үҙәге вәкилдәре инә. Ойошманың маҡсаты - ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар йыйыу буйынса нормативтарҙы ҡабаттан ҡарау һәм ентекләп өйрәнеү, килеп тыуған барлыҡ һорауҙарға аныҡ дәлилдәр килтереү, хаталарға юл ҡуймау, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар буйынса нормативтарҙы һәм тарифтарҙы халыҡ һәм төбәк операторҙары өсөн яраҡлы кимәлгә еткереү. Моғайын, хәл бер аҙ үҙгәрер, тикшереүселәр халыҡтың теләген, фекерен ишетер, иҫәпкә алыр, тип ышанайыҡ.

Бигерәк тә шәхси йортта йәшәүселәр, тимәк, ауылдағылар өсөн иғлан ителгән тарифтар күләме менән бер нисек тә килешеп булмай. Ысынында, ауыл кешеһе, киреһенсә, сүп-сарҙы аҙыраҡ түгә һәм улар күптән инде уны сорттарға айырыу менән шөғөлләнә, сөнки ихатаһы, баҡсаһы, мунсаһы бар. Ҡала кешеһе иҫкергән йәки боҙолған ризыҡты, аҙыҡ-түлекте сүп-сар менән ҡуша ташлаһа, ауыл халҡы уларҙы йә малына ашата, йә органик ашлама урынына баҡсаһына түгә. Ҡағыҙ, ҡатырға кеүек сүп-сар ҙа ауыл кешеһененең ихтыяжынан артмай: яҙғы-көҙгө бысраҡтарҙа уларҙы аяҡ кейеме аҫтына һалһалар, һуңынан, ямғырлы көндә баҡсаға сығарып яндыралар. Ғөмүмән, ауылда элек-электән сүп-сарҙы, иҫке-моҫҡоно яндырыу ғәҙәте бар. Һөт-ҡаймағы ла күптәрҙең үҙенеке, ҡала кешеһе кеүек магазиндан пластик һауыттағы йәки башҡа ҡаплы продукт алаһы түгел. Ремонт эштәре алып барғанда ла сүп-сар ҡала фатирҙарынан сыҡҡан күләмдән күпкә әҙ була. Ҡала кешеһе хатта үҙенең ял иткән урынын да сүп-сар ояһына әйләндереп китһә, ауылда йәшәүселәр, киреһенсә, үҙ йорто тирәһен генә түгел, урамын, ауылын, урмандарын таҙа торорға тырыша. Әлбиттә, бөгөн был матур ғәҙәт юҡҡа сығып барһа ла, ауыл кешеһененң "минеке" тигән төшөнсәһе ауылы кимәлен үҙ эсенә алһа, ҡала кешеһенең "минеке" тигәне үҙ фатирының ишеге эсендә ҡала. Был - мәсьәләнең бер яғы ғына. Икенсе яғы тағы ла ауыл кешеһенең бәкәленә һуҡҡан аҡса мәсьәләһенә барып төртөлә. Эшһеҙлектән интеккән ауыл кешеһенә йылына 1000 һум да ҙур аҡса. Мәсьәләнең өсөнсө яғы - бөгөн ҡалала күптәр торлаҡһыҙ, фатирҙарҙы ҡуртымға алып йәшәй. Уларҙың күбеһе ауылдарҙа теркәлгән. Бындай категория ауылға ҡайтып-китеп кенә йөрөгән осраҡта ла сүп-сар өсөн теркәлеү урыны буйынса иҫәпләшергә тейеш була.

Халыҡты шаңҡытҡан был яңылыҡ 2030 йылға тиклем ҡалдыҡтарҙың кеше сәләмәтлегенә һәм тирә-яҡ мөхиткә кире йоғонтоһон кәметеү, уларҙан икенсел матди ресурстар эшләү күләмен арттырыу тураһындағы Федераль Закон талаптары нигеҙендә килеп тыуа, әлбиттә. Билдәләнеүенсә, йыйылған сүп-сарҙың 86 проценты утилләштерелергә һәм ҡабаттан эшкәртелергә тейеш. Башҡортостанда был эш менән биш зона буйынса 4 төбәк операторы (ике зонаға бер оператор) шөғөлләнәсәк. Хеҙмәтләндереүсе ойошмалар һәр территорияға контейнерҙар ҡуйырға, йылдың һәр миҙгелендә уларға барыу юлын таҙа һәм асыҡ торорға, сүп-сарҙы ваҡытында сығарып торорға йөкләмә ала. Әммә йөкләмәләрҙең үтәлеше генә һорауҙар тыуҙыра. Бынан тиҫтә йылдар самаһы элек Өфө эргәһендә Шамонино ауылы төҙөлгәс, сүп-сар (бигерәк тә төҙөлөш ҡалдыҡтары) түгеү проблемаһы килеп тыуҙы. Башта билдәле бер урындарға контейнерҙар ултыртып сыҡтылар, әммә улар тиҙ генә тулып, ҡышын урам буйлап туҙышып, йәйгеһен һаҫып ултырҙы. Өҫтәүенә эт-ҡош шул урында төйәкләнә. Халыҡ ризаһыҙлыҡ белдергәс, контейнерҙарҙы алып, махсус машина урам буйлап йөрөп, сүп-сар йыя башланы. Әммә уның ҡасан килере аныҡ билдәһеҙ булғанлыҡтан, сүп-сар тоҡтарын кешеләр иртән урамдарға сығарып ултыртыр булып китте, машина килеп алғансы, уларҙы эттәр йыртып, күп осраҡта урамдар сүп-сарға тула ине. Һуңынан тағы ла икенсе хеҙмәтләндереүсе ойошма менән килешеү төҙөлдө... Хәҙер хәл-торош нисектер, әммә күптәр аҙыҡ-түлек ҡалдығын баҡсаһына түгә, ә яндыра торған нәмәләрҙе яндыра. Һөҙөмтәлә сүп-сар күләме бөтөнләй аҙ ғына ҡала...

Оҡшаймы был яңылыҡ беҙгә, юҡмы - закон сығарыусылар халыҡҡа уйларға ла урын да ҡалдырмаған: хеҙмәт өсөн түләмәүсе граждандарға - ике мең һумға тиклем, предприятие-ойошмалар өсөн - 250 мең һумға тиклем штраф, йәки эшмәкәрлектәрен 90 көнгә тиклем туҡтатыу яуаплылығын билдәләп тә ҡуйған.

**Әйткәндәй, "Юлдаш" радиоһының алып барыусылары был йәһәттән бик тапҡыр йыр ижад иткән, күҙ һалайыҡ әле:**

**Аҡыллы фекерҙәр ҡайҙа?**
**Депутат мейеһендә!**
**Хәҙер беҙ ҙә туҡталырбыҙ**
**Шуларҙың береһенә.**
**Сүп-сарҙың тауҙары бейек,**
**Уны һуң нишләтәйек?**
**Депутаттар яуап тапҡан -**
**Халыҡтан түләтәйек.**
**Тау булып аҡса өйөлһә,**
**Түләр инек, һүҙ ҙә юҡ.**
**Әлегә бит аҡса түгел,**
**Тау булып ята ҡыйлыҡ.**
**Сүп-сарҙың тауҙары бейек,**
**Уға әйәләй кейек.**
**Халыҡ башын ҡатыралар,**
**Аҡса түләгеҙ, тиеп.**
**Ҡалдыҡһыҙ йәшәүгә күсеп,**
**Закон йәшәргә ҡуша.**
**Ашарбыҙ инде картуфты,**
**Ҡабығы менән ҡуша.**
**Сүп-сарҙың тауҙары бейек,**
**Уны һуң нишләтәйек?**
**Депутаттар яуап тапҡан -**
**Халыҡтан түләтәйек.**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әҙерләне.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# БЕР АУЫЛДЫҢ ҺҮНЕП БАРҒАНЫ

**Район Советы һәм хакимиәте ойошторған күсмә кәңәшмәләрҙә йөрөгәндә күңелде ҡырған, хафаға һалған, борсолдорған хәл-ваҡиғаларға йыш юлығыла. Түбәнге Биҡҡужа ауыл биләмәһенә ҡараған Мерәүешле ауылындағы осрашыуҙан һуң да шулай булды.**

Район үҙәгенән дә, хатта Йомағужанан да ситтә урынлашҡан ауылға килеп инәбеҙ. Кешенең генә түгел, хатта Хоҙай иғтибарынан да мәхрүм төбәк булып күренде ул. Ярым емерек был ауылда кеше йәшәй микән ни, тип уйланды башта. Кемһеләр йортон терәтеп ҡуйған, бер йорттоң ҡыйыҡ аҫтына сепрәк-сапраҡ тығып йылытып маташҡандар. Кеше йәшәгәнен белдереп, ҡоймалары буялып, ҡыйыҡтары яңыртылған, йорт эргәһендә еңел машина, трактор, кәртә-ҡура тулы бесән, ҡош-ҡорт ҡаңғылдашҡан өйҙәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Был ауылға 1891 йылда урыҫ крәҫтиәндәре тарафынан нигеҙ һалына, егерменсе быуаттың егерменсе йылдарында мордвалар нигеҙләгән Курасов утары ла уларға ҡушыла. Ауыл хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, хәҙерге ауыл 1988-1989 йылдарҙа Йомағужа һыу һаҡлағысын төҙөп, һыу аҫтында ҡалыу хәүефе янаған ауылдарҙы күсереп ултыртыу маҡсаты менән төҙөлгән була. Урыҫ ауылы булараҡ, төп фамилия Черновтар, Таракановтар, Горбачевтар, Юркиндар, Дрокиндар иҫәпләнә. Башҡалар иһә төҙөлөшкә эшкә килеп, ошонда төпләнеп ҡалған кешеләр. Барлығы 89 кеше йәшәй, шуның 22-һе - 18 йәшкә тиклемге балалар.

Халыҡ йыйылған (халыҡ тигәнем өс кеше инде: фельдшер, уныһы ла күрше ауылдан йөрөп эшләй, һәм ике апай) фельдшер-акушерлыҡ пунктына инәбеҙ. Аҡ халат өҫтөнә ҡышҡы куртка кейеп ҡаршы алды беҙҙе фельдшер. Ҡалайтһын - бина һыуыҡ. Йылы яратҡан ҡытай раузаһы ла һалҡынға бирешеп, япраҡтары бөршәйеп ҡалған. Ә бына һыуыҡ һауаны үҙ иткән, гәҙәттә, ҡаты һыуыҡтар төшкәс кенә шаурап сәскә ата торған декабрист гөлө - шау сәскәлә!

Осрашыуға килгән ике апайҙан ауыл хәлдәре тураһында һорашабыҙ.

"Эсәләр. Суррогат араҡы һаталар ауылда. Кешеләрҙең ағыуланған осраҡтары күп. Хатта ун туғыҙ йәшлек балалар "аҡ биҙгәк"кә дусар булды. Бала тип тормай, оло тип тормай, аҡса өсөн кеше ағыуларға ла әҙер ул араҡы һатыусылар. Берeһенең дә көсө етмәй шуларға. Типһә, тимер өҙөрлөк ирҙәрҙең, әле йәшәргә лә йәшәргә тейеш балаларҙың, эсеп, кешелектән сығыуына түҙерлек хәл ҡалманы. Ниндәйҙер сара күрергә кәрәк бит, инде лә бөткән ауылды юҡҡа сығарырғамы?" - тип әрней апайҙар.

Даими эшләгән фельдшер әлеге көндә ауырып тороу сәбәпле, халыҡты күрше ауылдан килеп хеҙмәтләндерәләр. "Шул хәтлем ауыр халыҡ йәшәй бында. Медицина тикшеренеүе, диспансеризация, прививка эшләтеү осоро етһә, тағы нимәләргә юлығам, тип, ҡот осоп тора. Ҡайһы берәүҙәрҙең өйөнә инеүе лә ҡурҡыныс, унда һине нимә көтөрөн дә белмәйһең. Ике насар ғаилә иҫәптә тора, улар менән эшләүе бигерәк тә ауыр. Бер ғаиләләге ҡатын етенсегә ауырлы, ире эсә. Ауырлы ҡатынға ваҡытында тикшеренеүҙәр үтеп торорға кәрәк бит инде, ә ул дауаханаға барырға ҡәтғи ҡаршы. Әле бына саҡ-саҡ ыҡҡа килтереп, Өфөгә дауаханаға алып барып һалдыҡ. Аталары эсеп йөрөгәс, балаларын ваҡытлыса приютҡа алып барып торорға тура килде. Бер мәл бер буш торған өйгә барып инһәк, әллә иҫерек, әллә үле ир кешегә барып юлыҡтыҡ. Ярай, паспорты эргәһендә инде, Салауат ҡалаһынан икәнлеген белдек", - тип хәлдәрҙе бәйән итә ауыл фельдшеры. Баҡтиһәң, сит-боттан төпкөл ауылдарҙағы ошолай буш торған йорттарға ҡалдырып китеү осраҡтары "ҡара риэлторҙар" ҡылығы икән.

Ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Йәмил Айҙарбәков та Мерәүешле ауылының проблемаларын хәл итергә тырышып ҡараған. Тик, уның әйтеүенсә, бындағы халыҡты бер нисек тә ыҡҡа килтерерлек түгел икән. Ялған араҡы эсеп, үлеп бөтөп барһалар ҙа, ул ағыуҙы кем һатҡанын әйтмәй урындағы халыҡ. Эскелек һаҙлығына ғына түгел, битарафлыҡ һаҙлығына ла батҡан улар. "Участковый менән бер мәл араҡы һатҡан кешене тоторға тип, рейд та үткәреп ҡараныҡ. Аҡсаны тамғалап, һатып алыусыны ла таптыҡ. Таныш булмағас, был шөғөл менән булыусы алыпһатар беҙҙең кешегә араҡы һатманы... Бәлки, халыҡ ыңғай үҙгәрештәргә ылығып китер, тип, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы үткәрәйек тип тә тәҡдим иттек, юҡ, ризалашманылар. Йорт-тирәһен төҙөкләндерһәләр, аҡлаһалар, буяһалар тип, бушлай эзбиз да алып килеп ҡараным - береһе лә алманы. Былай килһә йылға планда тора ауыл байрамын үткәреү. Нисек килеп сығыр - әйтеүе ауыр әлегә", - ти Йәмил Фәнил улы.

Шулай ҙа матур йәшәгән ғаиләләр ҙә бар Мерәүешлелә. Уларҙың күбеһе ситтән күсеп ултырған үҙебеҙҙең башҡорт ғаиләләре. Шундай тырыш, егәрле кешеләр арҡаһында ғына, бәлки, ауыл ауыл иҫәбендәләр. Өс бер туған Фәрит, Зиннур, Илгиз Хөснетдиновтар, Фирүзә менән Рауил Ғөбәйҙуллиндар, Гөлсирә менән Илфат Байсариндар, Миңзәлә менән Вәсим Вәхитовтар, Гөлзада Вәхитова, Надежда менән Михаил Курочкиндар матур итеп донъяһын да көтә, кәртә тултырып мал-тыуарын да аҫрай, ҡош-ҡортон да үрсетә, бал ҡорто ла тота, мул итеп баҡсаһын да үҫтерә. Тырышҡан кешегә ауылда эш етерлек. Уларға ҡарап ҡына ла йәшәргә ынтылырға була ла бит...Мәктәпкә балалар Йомағужаға йөрөп уҡый. Уларҙы көн һайын автобус йөрөтә. Яҙлы-көҙлө бысраҡ булып торһа ла, ҡышын һәр ваҡыт юл асыҡ, ваҡытында таҙартып, юл ярып торалар, быйыл урындағы башланғыстарға ярҙам итеү программаһы буйынса ауыл урамын яҡтыртыу планлаштырыла...

Үрге, Түбәнге Биҡҡужа ауылдарында ла хәл ителәһе мәсьәләләр байтаҡ булып сыҡты. Ҡасандыр ата-әсәләрҙең үҙ теләктәре менән ябылған мәктәп тә буш тора. Аҡыл һуң килә, һуң килһә лә мул килә, тигәндәй, хәҙер килеп мәктәпте ҡайтанан астырырға теләп, республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Фәрит улы Хәбировҡа мөрәжәғәт иткән ауыл халҡы. Ниндәй һөҙөмтәләр булыр - уныһын киләсәк күрһәтер (ыңғай хәл ителһен инде тип теләйбеҙ, сөнки 48 бала ситкә йөрөп уҡырға мәжбүр). Ауыл клубы, китапхана торошо менән дә таныштыҡ. Иҫке генә булһа ла, әле ярарлыҡ, торорлоҡ. Клуб мөдире әйтеүенсә, һыуыҡ булғанға халыҡ бик йөрөмәй. Ә матбуғатты былай алдыралар. Яңы китаптар ҙа даими килеп тора икән китапханаға.

Сүп-сар реформаһы тураһындағы яңылыҡты биҡҡужалар башҡа ауылдар менән сағыштырғанда нисектер тынысыраҡ ҡабул итте, "ЭкоСити" компанияһы белгесе тиҙ-тиҙ генә сығыш яһанымы - мәсьәлә айышына ҡапылғара төшөнөп етмәнеләр кеүек тойолдо. Шулай ҙа халыҡ араһынан асыҡлыҡ индерергә теләп һорау биреүселәр булды. "Әгәр килешеү төҙөмәһәк, нимә була?" тип һоранылар. Белгес былай тип яуап бирҙе: "Рәсми килешеү матбуғатта баҫыласаҡ, шул халыҡ менән асыҡ килешеү булып иҫәпләнә". Тимәк, һәр кеше менән айырым-айырым килешеү төҙөлмәйәсәк. "Сүп-сар булмаһа ла, түләргә кәрәкме?" тигән һорау ҙа ишетелде. Был һорау ҙа урынлы. Сөнки яңғыҙаҡ әбей-һәбейҙәрҙә генә түгел, эшкә яраҡлы кешеләрҙә лә ҡый-һай әллә ни булып тормай, айырыуса ҡышҡыһын. Аҡса сығармаҫ өсөн (артыҡ аҡса ла юҡ инде) халыҡ ҡалдыҡһыҙ көн итеүгә лә күсергә әҙер. Ни булһа ла, халыҡ файҙаһына булһын ине, тип теләргә генә ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мерәүешле ауылындағы хәлде күргәндән һуң башҡа ауылдарҙағы хәл-торош, кем әйтмешләй, "Әл-хәмду лилләһ" һымаҡ күренде. Әлбиттә, бынан бер нисә йыл элек "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашып, үҙен республика кимәлендә таныттҡан Биккужа ауыл биләмәһе тураһында матурлап, ентекләп тә яҙырға мөмкин. Ни тиһәң дә, тырыш халыҡ йәшәй унда. Ни бары әҙ-мәҙ иғтибар ҙа, ихтирам кәрәк уларға. Белем усағын да яңынан асып ебәргәндә ауылға ҡот ҡайтыр ине. Мәктәп бөтһә - ауыл бөтә. Ошо әҙемтә әле үк үҙен һиҙҙерә.**

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**
**Күгәрсен районы.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Муйын тирәһенә массаж эшләп бөткәс, кешене арҡаһына ятҡырып, баш аҫтына бер нисә ҡат бөкләнгән таҫтамал һалығыҙ һәм муйынына массаж эшләгеҙ. Кеше эсендә ятҡанда муйын мускулдары көсөргәнештә була, шуға муйынға арҡанан массаж эшләү дөрөҫ түгел. Профилактик массаждың оҙайлығы 30 минуттан да кәм булмаҫҡа тейеш. Әгәр ул тиклем ваҡытҡа хәлегеҙ етмәй икән, бармаҡтарығыҙ менән йомшағыраҡ баҫығыҙ, әммә ваҡытты ярты сәғәткә еткерегеҙ. 2-3 көндән бармаҡтарығыҙ ул тиклем үк ауыртмаҫ.

## Дөйөм сәләмәтлек өсөн аяҡ табандарына массаж

Дөйөм организмды көсөргәнештән арындырыу өсөн барлыҡ ағзаларҙың да биологик әүҙем нөктәләренең меридиандары тоташҡан аяҡ табандарын массажларға өйрәнергә кәрәк. Иң ябай һәм бушлай тренажер - бәләкәй өҫтәл дәүмәлендәге дүртмөйөш. Уның өҫтөнә борсаҡ ҙурлығынан алып йомортҡалай таштар һалырға (осло таштар эләкмәһен) кәрәк. Был тренажерҙы өйҙә, баҡсала, ихатала эшләргә мөмкин. Иң мөһиме көнөнә бер нисә минут ялан аяҡ ошо таштар өҫтөнән йөрөүҙе ғәҙәт итеп алығыҙ.

## Магний - "ялған" антидепрессант

Бындай осраҡтарҙа ваҡытлыса магний ярҙам итә. Белгестәр уны ялған антидепрессант тип атай. Магний балыҡта, иттә, йомортҡала, күҙәнәкле тәбиғи ҡара шоколадта, какаола, кофела бар. Кофе нерв-психика торошон яҡшы тигеҙләй, көнөнә ике сынаяҡ кофе хатта гипертониктарға ла артыҡ зыян килтермәй.

## Чага менән көртмәле - депрессиянан сара

Ҡыуа (ҡайын ороһо) - яҡшы антидепрессант. Уны урманда табырға йәки дарыухананан һатып алырға була. 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡыуаға 300 мл ҡайнар һыу һалып бешерәләр. Шулай уҡ көртмәленең дә һөҙөмтәһе ҙур. Уны урманда йыйырға йәки дарыухананан һатып алып ҡулланырға мөмкин. Көртмәле иммунитетты нығыта, күңелде күтәрә. Дарыухананан алғанда иртән һәм кисен икешәр төймә ашарға мөмкин.

## Депрессияны еңергә тағы бер нисә кәңәш

Киндер тоҡҡа бер күләмдә ҡомалаҡ, мәк, бөтнөк (мята), һары мәтрүш, аҡ сәскә, тырнаҡ гөлө һалып, уны йоҡо бүлмәһендә баш осоно элеп ҡуялар йәки мендәр эргәһенә һалалар. Был үләндәрҙең еҫе төнәтмәләргә ҡарағанда һөҙөмтәлерәк тәьҫир итә. Яңы ай тулғанда йәки тулы ай ваҡытында тынысландырыусы һәм үлән сәйҙәре ярҙам итер: бөтнөк, лимон бөтнөгө (мелисса), фаягөл (синюха), дөрдөр сәскә (марьин корень. Уның дарыуханала һатылған төнәтмәһен "Уклоняющийся пион" атамаһы менән алырға була: уны көнөнә 3 тапҡыр 20-30 тамсы эсергә). Ауыр көндәрҙе үткәрергә ябай ҡомалаҡ ярҙам итә - барлыҡ йоҡо дарыуҙары араһында иң тәбиғийе. Депрессияға бирелә башлаһағыҙ, йоҡо алдынан устарығыҙҙы эсегеҙҙең аҫҡы өлөшөнә 10 минут баҫып тороғоҙ. Ошо торошта йоҡлап китһәгеҙ тағы ла яҡшыраҡ. Депрессиянан арынырға ҡыҙыл костюм ярҙам итер.
